ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-3 октябрь - ноябрь (карасай - ҡырпағай)

2017

№43 (773)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡағиҙәһеҙ алыш...**

аяуһыҙ ҙа була, күрәһең



6

**Беҙҙең халыҡ күсмә түгел,**

ә сауҙәгәр ҙә, игенсе лә, сәнәғәтсе лә булған



7

**Ысын бәхетте...**

маҡсатыңа ҡарай хәрәкәт иткәндә табаһың



8-9

**Ике ут араһында...**

шик-шөбһә, күләгә юҡ, бар нәмә аңлайышлы, ябай



11

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан 31 октябрь Халыҡ-ара һаҡсыллыҡ көнө тип иғлан ителгән. Һаҡсыллыҡ һеҙҙең өсөн нимәне аңлата?

***Мазһар ИҪӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, академик, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре:*** Хужалыҡ итеүҙең төп нигеҙе - ул һаҡсыллыҡ. Шунһыҙ предприятиелар төшөмлө эшләй ҙә алмаясаҡ, үҫеш тә булмаясаҡ. Бынан айырым хужалыҡтар ғына түгел, ә тотош ил иҡтисады ла зыян күрә. Мәҫәлән, урман ҡырҡыусылар эшмәкәрлеген генә алайыҡ. Элек-электән беҙҙең илдә был күп йәһәттән зыян күреп эшләүсе тармаҡтарҙың береһе булды, тип әйтергә лә мөмкин. Рус халҡында бер әйтем дә бар бит: "Урман киҫәләр - таптары оса". Таптары ғына булһа икән... Өйөм-өйөм ботаҡтары диләнкә тулып ята, ә аҙаҡ уны махсус үртәйҙәр ине хатта. Бына шулай күпме аҡса яндырылды заманында. Йә булмаһа, файҙалы ҡаҙылма сығарыусы предприятиеларҙан ҡалған руда тауҙарын ҡарайыҡ. Сеймалды файҙаланыуҙа һаҡсыллыҡ күрһәтеп, ундағы ҡиммәтле компоненттарҙы айырып алыу, йәғни ҡалдыҡһыҙ эшкәртеү ысулын ҡулланмағас, ана шул тауҙарҙа күпме файҙалы минерал әрәм булып ята! Икенсенән, руда составындағы ҡайһы бер зарарлы элементтар һыуҙы, һауаны, тупраҡты бысрата. Өсөнсөнән, тәбиғи ресурстарҙың да бит запасы төпһөҙ түгел, улар йылдың-йылы кәмей. Эсәр һыу мәсьәләһен генә алып ҡарағанда ла асыҡ күренә был. Һыуҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ. Ә бит киләсәктә эсәр һыуға ҡытлыҡ тыуасағы хаҡында күптән иҫкәртә килә белгестәр. Ғөмүмән, һаҡсыллыҡ иҡтисад өлкәһенең генә төп принцибы түгел ул, ә һәр беребеҙҙең тормош рәүеше лә булып торорға тейеш. Бөгөн шунһыҙ йәшәү мөмкин дә түгел. Әлеге лә баяғы һыуҙы, электр энергияһын, йылылыҡ ресурстарын, икмәгебеҙҙе, аҡсабыҙҙы һаҡсыл файҙаланайыҡ - илгә лә, үҙебеҙгә лә бәрәкәт кенә килтерер был ғәҙәтебеҙ.

***Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, Бөрйән районының "Әсинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Булғанды туҙҙырыу, әрәм-шәрәм итеү, әрәмгә ебәреү, тотоноуҙа һаҡһыҙлыҡ күрһәтеү, иҫәпһеҙ тотоноу, барҙың ҡәҙерен белмәү, барҙы юҡ итеү, бушҡа тәләф итеү, уңлы-һуллы таратыу, исраф итеү кеүек киҫәтеүҙәрҙе бала саҡтан ишетеп кенә түгел, шуларҙан ғәмәлдә тыйылып үҫкән быуын вәкилемен. Сөнки атай-әсәйҙәребеҙ үткән быуаттың 20-се йылдарындағы йотлоҡ, 30-сы йылдарында колхозлашыу, 40-сы йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы, 50-се йылдарҙағы һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ осорҙарын туранан-тура үҙ елкәләрендә күтәргән кешеләр ине. Унан һуң инде 60-70-се йылдарҙағы торғонлоҡ, 80-90 йылдарҙағы түңкәрелеш осорҙарындағы етешһеҙлектәргә лә үҙебеҙ шаһит булдыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# БАЛАЛАРҘЫ БЫНДА...

## тыуған йорт йылыһы тарта

**Көн һайын эшкә барғанда, беҙҙең йорт янындағы былтыр ғына ишектәрен асҡан өр-яңы, һәләк ҡупшы балалар баҡсаһы янынан үтергә һәм көн һайын тип әйтерлек ошо баҡсаның семәрле кескәй генә ҡапҡалары янында ҡысҡырыш, әр, илаш-тартыш күренешенең ихтыярһыҙ шаһиты булырға тура килә. Айырыуса бер көн 3-4 йәштәрҙәге ҡыҙыҡайҙың кескәй генә ҡулдары менән әлеге семәрле ҡапҡаға сытырҙатып йәбешеп: "Не хочу!"- тип сәрелдәүе, ярһыған әсәнең баланы йолҡа тартып, түпәләй-түпәләй баҡса ишегенә табан һөйрәкләүен күргәндән һуң туҡталышыма урау булһа ла икенсе юлдан йөрөй башланым...**

**(Дауамы 5-се биттә).**



*Өфөләге 221-се башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Ләйсән Усманова (3-сө рәт уңдан - беренсе) тәрбиәселәр һәм балалар менән.*

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИҢ ЯҠШЫҺЫ БУЛАЙЫҠ!

***Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА, БДУ-ның Учалы вәкиллеге директоры:*** Ил халҡы йә айырым милләт вәкилдәре тураһында беҙ донъяла күптән билдәле, стереотипҡа әйләнгән фекерҙәргә таянып һығымталар яһайбыҙ ҡайһы саҡ. Немец халҡын беҙ пунктуаль, педантлыҡ менән айырылып тора, япондар - эшһөйәр, сиған икән - алдап китер, тип уйлайбыҙ. Ә башҡорттар тураһында башҡалар нимә белә һәм ниндәй фекерҙә икән? Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә башҡорттарҙы борондан килгән ҡараш - яугир халыҡ, ҡунаҡсыл да тип беләләр, беҙҙе шулай уҡ милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурай, башҡорт балы аша таныйҙар. Милләттәштәр был турала уйланғаны бармы икән, белмәйем. Әммә мин һәр ваҡыт уйға ҡалам, ошо билдәләрҙән башҡа, башҡорт халҡы, Башҡортостанды донъя кимәлендә танытырлыҡ яҡшы сифаттарыбыҙ, үҙенсәлектәребеҙ юҡмы ни? Миңә ҡалһа, бар ундай ыңғай күренештәр, ләкин уларҙы башҡаларға күрһәтә белергә генә кәрәк.

Башҡа халыҡтар бармы-юҡмы тип ҡарап тормай, үҙҙәрен таныта алғандай әйберҙәр тураһында бөтә кешелеккә маҡтанып хәбәр итә икән, беҙгә лә үҙебеҙҙе күрһәтеп өйрәнеү мөһим. Башҡорт кешеһенең тырыш, эшен еренә еткереп башҡара, намыҫлы, гүзәл икәнен дә белһендәр. Башҡортостанда етештерелгән тауарҙар, аҙыҡ-түлек иң юғары сифатлы, бөтә талаптарға яуап биргән продукцияға әйләнһен. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорт кешеһе, ул эшләгән әйбер үҙенә күрә бер брендҡа әүерелһен.

Әлбиттә, быңдай дан бер-ике йыл эсендә генә барлыҡҡа килмәй, ул быуындар дауамында тыуҙырыла. Шуға күрә, бер эштә оҫтаһың икән, үҙеңә алмашҡа бәләкәйҙән уҡыусылар тәрбиәләргә кәрәк. Башҡорт яугир, бай тарихлы, мәҙәниәтле халыҡ булыуын да белһендәр, шулай уҡ уның ниндәй эште лә сифатлы итеп башҡарыуына инандырайыҡ бөтәһен дә. Сөнки кеше өсөн үҙен ҡайҙа ла кәрәкле итеп тойоу, эшен дөрөҫ баһалауҙарын белеү, үҙен хөрмәт итеүҙәрен күреү мөһим. Башҡорт кешеһен ҡайҙа йөрөһә лә хөрмәт итеп торһондар, эш урыны эҙләй икән - башҡа бирәү урынына уны алһындар, тауарын һатып торһа - уныҡына күҙҙәре төшһөн.

Шуға ла милләттәштәргә былай тип өндәшәм: башҡорт эшләгән әйбер һәм һөйләгән һүҙ, тикшермәйенсә лә, иң яҡшы сифатлы һәм ышаныслы булһын өсөн тырышайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан 31 октябрь Халыҡ-ара һаҡсыллыҡ көнө тип иғлан ителгән. Һаҡсыллыҡ һеҙҙең өсөн нимәне аңлата?



**(Башы 1-се биттә).**

Унан ҡалһа, диндар ҡартинәйебеҙ икмәк киҫәген ашап бөтмәй ҡалдырыу ғына түгел, валсығын иҙәнгә төшөрөүҙең дә ярамаған эш икәнен ҡанға һеңдерешә. Ындай гонаһ өсөн Аллаһы Тәғәлә башҡа һуға, тигән киҫәтеүен балалыҡ аҡылы менән, ысынлап шулай була икән, тип ҡабул иткәнмен дә, күңелдә шулай ғүмерлек һаҡлағанмын. Һәр эштә йыйнаҡ булыу, булғанды ҡәҙерләп һаҡлау, әйберҙе һаҡсыл тотоноу, аҡсала иҫәпсел булыу, юҡтан бар яһау - беҙгә тыумыштан инселәнгән бурыстар инде. Хатта Стәрлелә ғүмер иткән осоромда әсәйем ҡунаҡҡа килгәнендә крандан һыуҙы шаборлатып ағыҙып тотоноуыбыҙҙы өнәмәй: "Ай, исраф итәһегеҙ һыуҙы, ауылдағыса туҫтаҡҡа ғына алып йыуығыҙсы, ағыҙмағыҙ бушҡа!" - тип кенә тороуы ла урынлы булып ҡала ине. Шул арала һыуҙы, газды, электр ҡеүәтен һаҡсыл тотонорға хөкүмәт үҙе талап итә башланы бит!

Һуғыш ваҡытында Өфөләге 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһында фронт өсөн шинель-гимнастеркалар теккән әсәйемдән ҡуҫҡан тағы ла бер һәләтем - ҡорама ҡорау булды. Был шөғөл тормошта, көнкүрештә һаҡсыллыҡҡа иң сағыу өлгө тиһәң дә була. Донъя ҡорамаһан йыйыла, тип бушҡа әйтмәгән боронғолар. Уның тамырҙары боронғо дәүерҙәрҙән, тәрән тарих ерлегендә барса халыҡтарға ла берҙәй уртаҡ. Үҫтерелгән урынына ҡарап, тәбиғи ебәкме ул, кизе-мамыҡмы, етен йәки киндер туҡымамы; әр-яһымы, әллә ҡулланылышта булып иҫкергән сепрәк киҫәгеме - уны исраф итеү мөмкинлеге башына ла кереп сыҡмағандыр кешелектең! Оҙаҡ ваҡыт арауығы эсендә ҙур хеҙмәт көсө түгеп етештерелгән, шуға күрә ҡиммәтле һаналған туҡыманың һәр төрөн, бәләкәй генә киҫәгенә тиклем, файҙалы ҡулланыу заруратынан барлыҡҡа килгән ҡорама ҡорау һөнәренә ҡатын-ҡыҙ затынан булған һәр кем әйә булырға тейештер, тигәнгә иманым камил. Шуға күрә, ҡайҙа ғына барһам да, мөмкин булған бар ерҙә оҫталыҡ дәрестәре күрһәтеү ғәҙәтемә ингән. Аллаға шөкөр, барыбыҙ ҙа етеш тормошта йәшәйбеҙ, туҙмаған килеш өҫтө-өҫтөнә кейем алабыҙ, элеккеләре кейелмәй тора. Ташлаһаң - йәл, кешегә бирер булмай. Һәр кемдең үҙенеке үҙенә етерлек заманда ҡорама ҡорау элекке кеүек мохтажлыҡтан түгел, ә сәнғәт кимәлендәге ижад төрөнә күтәрелде. Иҫке әйҙә һүткәнсе, яңыһын һал; иҫке тимерҙе һаҡлаһаң, алтын булыр; яңы туным булды тип, иҫкеһен утҡа һалма; яңы булды тип, иҫкене хурлама, тигән мәҡәлдәрҙе барыбыҙға ла төбәп әйткән бит боронғолар. Тәбиғәтте һаҡлау йыйлы иғлан ителә килә, сөнки әле ҡулланырлыҡ әйберҙе иҫке тип ташлап, донъяны сүп-сарға батырыуҙан дөйөм кешелек алдына ҙур хәүеф килеп баҫҡанын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ. Юҡҡамы ни, исрафтан һаҡланыу динебеҙҙә лә иң ҙур талаптарҙың береһе.

***Фәтиха ИМАНҒОЛОВА, хеҙмәт ветераны:*** Халыҡ-ара Һаҡсыллыҡ көнөн үткәреү идеяһы һаҡлыҡ банкылары институттарының халыҡ-ара конгресынан һуң тормошҡа ашырылһа ла, ул туранантура финанс мәсьәләләренә генә ҡағылмай. Уны ойоштороусылар был көнгә киңерәк мәғәнә һала. Мәҫәлән, ваҡыт төшөнсәһен алайыҡ. Күп кенә эшем әйәләренең: "Ваҡыт - аҡса ул!" тигәнен ишетергә тура килә һәм бында дөрөҫлөк бар. Ә уйлап ҡараһаң, һаҡсыллыҡтың бөтөн формалары ла ахыр сиктә ана шул аҡса экономиялауға ҡайтып ҡала бит. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ, ябай халыҡ, ғүмер буйы экономиялап йәшәргә күнеккәнбеҙ инде ул. Һаҡсыл булмай ҡара: һыу, һауа... уй, яңылыш әйттем, газ, электр энергияһы, йылылыҡ системаһы - бөтәһе лә бит иҫәп приборҙарына тоташтырылған хәҙер, зыр әйләнә генә улар - бик булырһың һаҡсыл! Бынан тыш, булыр-булмаҫ, етер-етмәҫ ғаилә "бюджетына" ла бик һаҡсыл булырға тура килә: витринаны ҡарап тораһың-тораһың да, ауыр һулап, төкөрөгөңдө йотоп, ары атлайһың. Бер яҡтан, үҙең өсөн ғорурһың да әле ул - ихтыяр көсө лә бар икән дә - тәки алманым бит теге нәмәне, аҡса бөтөрөп ни бушҡа... Ит йә тәмлекәс ашамағандан отам ғына ла мин: кәүҙәм зифа һаҡланыр. Ә инде әллә ни кәрәге булмаған башҡа тауарҙы һатып алмаҫ өсөн хатта белгес кәңәштәре лә бар икән. Шуларҙың бер нисәһе: 1. Аҡса янсығына "Ә был һиңә кәрәкме?" тип яҙылған сағыу төҫтәге стикер йәбештереп ҡуйырға. Ысын булһа, был 70 процент аҡсаны янда ҡалдырырға ярҙам итә, тиҙәр. 2. Рекламаға ышанып бармағыҙ, уға һәр ваҡыт шикләнеберәк ҡарағыҙ. 3. Магазинға сығырҙан алда мотлаҡ исемлек төҙөгөҙ һәм шул әйберҙәрҙе генә һатып алығыҙ. 4. Магазинға ас килеш бармағыҙ! 5. Мода йә бренд артынан ҡыуып, ҡурылатә ҡиммәт әйбергә ( бигерәк тә машина йә кеҫә телефонына ҡағыла был) ынтылмағыҙ, шул уҡ тауарҙың ябайырағын ярты хаҡҡа арзанырағына алырға ла була бит. Бер яҡтан, һаҡсыллыҡ - ул минең кеүек ярлы-ябағаның ғына ғәмәле, тип уйлау төптө дөрөҫ түгел - был һәр кемдең бурысы. Шәхси ваҡытына, сәләмәтлегенә һаҡсыл мөнәсәбәт бик ҙур бәләләр һәм күңелһеҙлектәрҙән ҡотҡарып алып ҡалыр үҙегеҙҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Ринат Шәғәлин Башҡортостан Республикаһы Башлығы эштәре менән идара итеүсе итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем 2014-2017 йылдарҙа ул Башҡортостан Республикаһының Мәғлүмәтләштереү һәм "Асыҡ республика" системаһының эш итеүе мәсьәләләре буйынса дәүләт комитеты рәйесе булды.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың указы менән Динир Әхмәтйәнов Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте Етәксеһе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығының икенсе Указы менән Рәмил Дилмөхәмәтов үҙ теләге буйынса Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте Етәксеһе урынбаҫары вазифаһынан бушатылды.

✓Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналған республика байрамы 2017 йылдың 4 ноябрендә көндөҙгө сәғәт 3-тә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа. Шул уҡ көндә киске сәғәт 6-ла ҙур мәҙәни сара - "Сәнғәт төнө-2017" Бөтә Рәсәй мәҙәни акцияһы башлана. Унда музейҙар, китапханалар, клубтар, театрҙар, филармониялар һәм башҡа мәҙәниәт учреждениелары ҡатнаша. 2017 йылдың 3 ноябрендә, Халыҡтар берҙәмлеге көнө алдынан, илдең һәр төбәгендә икенсе тапҡыр "Ҙур этнографик диктант" Бөтә Рәсәй акцияһы ойошторолаа.

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың Рәсәй Хөкүмәте ағзалары менән сираттағы кәңәшмәһендә Башҡортостанды йылылыҡ миҙгеленә әҙерлек буйынса иң яҡшылар иҫәбендә билдәләнеләр. Рәсәйҙең төҙөләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы министры Михаил Мень ҡышҡа иң яҡшы әҙерләнгән төбәктәргә Башҡортостан Республикаһын, шулай уҡ Камчатка крайын, Мәскәүҙе, Татарстанды, Алтай, Һамар, Тула, Липецк, Новосибирск өлкәләрен индерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Savencia (Франция) компаниялар төркөмө президенты Алекс Бонгрэн менән осрашты. Осрашыу барышында Бәләбәй һөт комбинатын үҫтереү перспективалары һәм уның аҙыҡ-түлек төрләнгән киңәйтеү, шул иҫәптән йомшаҡ сырҙар етештереүҙе ойоштороу мөмкинлеге тикшерелде.

✓ *Башҡорт дәүләт университетының Сибайҙағы һәм Нефтекамалағы филиалдарын һаҡлау буйынса мәсьәлә өйрәнелгән. Уларҙың составына Сибай педагогия һәм Нефтекама машиналар эшләү колледждары ингән.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠЫШҠА ӘҘЕРБЕҘ!

✓ **Ошо көндәрҙә Өфөлә ҡала райондарының Торлаҡ хужалығы идаралығы ҡарамағында булған ҡар таҙартыу техникаһы тикшерелде.** Былтырғы ҡыш коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәрен ҙур һынау алдына ҡуйҙы һәм тап ошо техника баш ҡаланың күп фатирлы йорттары ихатаһын миҙгел дауамында ҡарҙан таҙартырға тейеш. Аныҡлап әйткәндә, 4846 йортто 153 махсус техника хеҙмәтләндерәсәк. Тикшереү ике этапта үтте: торлаҡ предприятиеларының матди-техник базаһы торошон, ҡоралмалар, программалар һәм документациялар менән тәьмин ителеүен, авария-диспетчер хеҙмәттәренең урынлашыуын баһалау; ҡар таҙартыу техникаһының торошон ҡарау, агрегаттарҙың һәм механизмдарҙың төҙөклөгөн тикшереү. Бындай тикшереүҙәр - торлаҡ хужалығының ҡышҡа әҙерлек барышындағы мотлаҡ этап.

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһында Глумилин урамы, 2 адресы буйынса төҙөлгән туғыҙ ҡатлы яңы йорт хужалары ҡабул итергә әҙер.** Өфө шоссеһы урамындағы 4-се туғыҙ ҡатлы йорттоң авария хәлендәге подъездарында йәшәүселәр ошо йорттағы фатирҙарға күсәсәк. Билдәле булыуынса, 2015 йылдың аҙағында Өфө шоссеһы, 4 адресы буйынса урынлашҡан күп фатирлы йорттоң 1-се һәм 2-се подъезы авария хәлендә тип танылған. Бында йәшәүселәргә ваҡытлыса торлаҡ - ҡаланың төрлө районында уңайлыҡтары булған айырым фатирҙар бирелә. Хәҙер иһә уларҙың даими йәшәү урындары - үҙ мөйөштәре буласаҡ. Яңы йорт граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү буйынса республика адреслы программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә төҙөлә. Төҙөлештең дөйөм майҙаны 4500 квадрат метр тәшкил итә, туғыҙ ҡатлы йортта 72 фатир.

✓ **Башҡорт дәүләт университетының Сибайҙағы һәм Нефтекамалағы филиалдары һаҡланып ҡаласаҡ һәм эшен дауам итәсәк.** Был хаҡта республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов белдерҙе.Вице-премьер әйтеүенсә, Рөстәм Хәмитовтың уҙған йылдағы "тура элемтә" йомғаҡтары буйынса ҡушыуына ярашлы, Башҡорт дәүләт университетының Сибайҙағы һәм Нефтекамалағы филиалдарын һаҡлау буйынса мәсьәлә өйрәнелгән. Уларҙың составына Сибай педагогия һәм Нефтекама машиналар эшләү колледждары ингән. Бынан тыш, әлеге ваҡытта Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы менән Стәрлетамаҡта университет асыу тураһында мәсьәлә тикшерелә. Авиация университетының Күмертауҙағы һәм Ишембайҙағы филиалдарында авиация һәм машиналар эшләү мәғариф кластеры булдырыла.

✓ **15-17 ноябрҙә Өфөлә II "Беҙҙең бренд" аҙыҡ-түлек фестивале ойошторола, тип хәбәр итә Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте.** Күргәҙмә барышында аҙыҡ-түлек етештереүселәр конкурсын уҙғарыу, республиканың аҙыҡ-түлек базарындағы иң яҡшы продукцияны билдәләү ҡаралған. Ойоштороусылар фекеренсә, фестиваль бер яҡтан етештереүселәргә, дистрибьюторҙарға, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүселәргә һәм икенсе яҡтан йәмәғәт туҡланыуы һәм сауҙа селтәрҙәре вәкилдәренә бер майҙанда осрашырға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ ул продукцияны төбәк баҙарында һатыу өсөн уңайлы сара булып тора.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭЛЕКТРОН БЕЛЕМ ТУРАҺЫНДА



**Электрон белем биреүҙе үҫтереү буйынса ултырыштағы сығышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы үҙгәртеп ҡороласаҡ, тип билдәләне.**

Төбәк Башлығының фекеренсә, бер нисә йылдан академия дәүләт һәм муниципаль хеҙмәте өсөн кадрҙар әҙерләү, белемдәрен күтәреү һәм квалификацияны арттырыу буйынса беҙҙең төп учреждениеға әйләнәсәк. 13 мең дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәре өс йылға бер түгел, ә йыл һайын уҡырға, белемен күтәрергә, улар эшләгән бөтә йүнәлештәр буйынса яңы белем алырға бурыслы. Хеҙмәткәрҙәрҙең квалификацияһын электрон белем биреү - видеодәрестәр, вебинарҙар, текстлы онлайн-трансляциялар һәм башҡа интерактив формалар ярҙамында ла күтәреү күҙаллана. Ул уҡыуҙы муниципалитет хеҙмәткәрҙәренең эш һәм йәшәү урынына яҡынайтасаҡ. Киләсәктә электрон белем биреүгә бюджет өлкәһе - һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, социаль яҡлау хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеү күҙаллана. Бынан тыш, "Электрон белем биреү" порталында дәүләт хеҙмәткәрҙәре өсөн башҡорт теленә уҡытыу бүлеген булдырыу көтөлә.

# МАШИНАҢДЫ АЛЫП КИТҺӘЛӘР...



**Әгәр ufa-parkovka.ru сайтында теркәлһәгеҙ, автомобилегеҙҙе эвакуациялау тураһындағы хәбәр шунда уҡ кесә телефоныгыҙға киләсәк.**

Өфөнөң "Автопарковка урындарын төҙөкләндереү һәм тотоу буйынса" МБУ-һы шундай сервис асҡан. Автомобилде тейәй башлау менән уның тураһында мәғлүмәттәр электрон базаға индерелә һәм махсус программа шунда уҡ транспорт сараһының хужаһына смс ебәрә. Шулай уҡ был портал аша транспортты тейәү-бушатыу, эвакуациялау, һаҡлау хеҙмәте өсөн дә түләргә мөмкин. МБУ-ның төп бурысы булып ойошмаларға һәм халыҡҡа автопарковка урындарын булдырыу, уларҙы төҙөкләндереү, тотоу буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа ярҙам күрһәтеү, рөхсәт ителмәгән урында ҡуйылған транспорт сараларын эвакуациялау, коммуналь хеҙмәттәргә ҡаланы таҙартыу йәки штаттан тыш хәл-торош килеп тыуғанда транспортты күсерергә ярҙам итеү һ.б. тора. 2015 йылдан учреждение ҡарамағында ҡала ситендә урынлашҡан, эвакуацияланған автотранспорт һаҡланған 4 махсус урын иҫәпләнә. Эш көндәрендә ҡала 20 эвакуатор эшләй, уларҙың 5-е - учреждение балансында. Парковка ҡағиҙәләрен боҙған өсөн транспорт саралары ҡулға алынғас, уларҙы эвакуациялау тураһындағы мәғлүмәт диспетчер хеҙмәтенә килә һәм электрон базаға индерелә. Адмирал Макаров урамы, 5 һәм Пархоменко урамы, 131/1 адресы буйынса урынлашҡан диспетчер хеҙмәттәрендә өҫтәмә урындар ойошторолған һәм эш сәғәте ваҡытында юл-патруль хеҙмәте тотолған автомашинаны алыуға рөхсәт бирә. Ошонда уҡ булған махсус түктаҡалар көтөп тороу өсөн махсус биналар, түләү терминалдары менән йыһазландырылған. Шулай уҡ ҡулаҡса менән дә иҫәпләшергә мөмкин, был осраҡта түләү тураһында квитанция бирелә.

# ҘУР САРАҒА ӘҘЕРЛЕК




**Индонезияла Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре советы Генераль ассамблеяһы (CIOFF) ултырышында 2020 йылғы Бөтә донъя Фольклориадаһы менән таныштырыу булып үтте.**

Башҡортостанда ҙур сараны уҙғарыуға әҙерлек хаҡында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов һөйләне. Төбәк ойоштороу комитеты әҙерләгән план проекты Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре советы Генераль ассамблеяһына тапшырылған һәм уның ағзалары тарафынан хуплау алған. 47-се бөтә донъя Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре советы конгресы барышында Бөтә донъя Фольклориадаһын уҙғарыу өлкәһендәге хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙе тормошҡа ашырыу маҡсатында Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре советы Башҡарма комитеты һәм Республика халыҡ ижады үҙәге араһында Килешеү төҙөлдө. Был килешеүҙә 2020 йылғы төп мәҙәни сараға әҙерлек мәсьәләләре ҡаралған. СИОФФ президенты Филипп Боссан Фольклориадаға һәм киләһе йылдың сентябрендә Башҡортостанда уҙасаҡ 48-се Бөтә донъя Халыҡ-ара фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре советы конгресына әҙерлек барышын юғары кимәлдә тип билдәләне.

# ЮЛДАРҘА ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



**Тәүге ҡар яуыуы һәм юлдарҙа шәре, урыны менән боҙлауыҡ барлыҡҡа килеүенә бәйле коммуналь хеҙмәттәр ҡышҡы бурыстарын үтәүгә күсте.**

Төнөн үрҙәргә менеү һәм төшөү урындарында, күперҙәрҙә һәм юлдарҙа, юлдарҙың ҡатмарлы участкаларында ҡом һибелә. Ҡом запасы ҡаланың барлыҡ райондарында ла етерлек тупланған. Беренсе ҡарҙы таҙартырға барлығы 200 берәмек техника, 940 урам һепереүсе сыҡты. Әммә беренсе ҡарҙың водителдәр өсөн һәр ваҡыт һынау булыуын да билдәләмәй булмай. Хатта тәжрибәле водителдәргә лә ҡапыл ғына ҡышҡы рәүешкә күсеү ауырлыҡ тыуҙыра. Хәл-торошто күптәрҙең һуңғы көнгәсә йәйге тәгәрмәстәрҙә йөрөүе лә ҡатмарлаштыра. Шуға күрә, беренсе ҡарҙан һуң транспорт менән идара итеүгә айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Төнгө ҡырауҙан һуң да бик һаҡ булырға кәрәк - йоҡаҡ ҡына боҙ иртәнге сәғәттәрҙә күҙгә лә күренмәй. Был ваҡытта күперҙәрҙә, юл киҫелештәрендә, ҡалҡыу урындарҙа айырыуса уяу булыу зарур. Әйткәндәй, синоптиктар алдағы көндәрҙә лә ҡар яуыуын, боҙлауыҡ булыуын күҙаллай.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1 ноябрҙә Өфө "морждары" Якутов исемендәге паркта урынлашҡан Һалдат күлендә ҡышҡы һыу инеү миҙгелен аса. Улар аҙнаһына өс тапҡыр - шаршамбы, шәмбе һәм йәкшәмбе йөҙәсәк. Ә октябрҙең һуңғы йәкшәмбеһендә, 29 октябрҙә, сынығырға яратыусылар Сәләмәтлек һәм спорт көнөнә Тәрән күл (Дим карьеры) буйында йыйыла. Программала һыу инеү, ярыштар, уйындар күҙалланған.

✓Башҡортостан биләмәһенә Арктика һалҡынының үтеп инеүе көсәйә. Республика биләмәһендә һауа торошон һалҡын арктик һауа массаһы билдәләйәсәк, шуға күрә һауа температураһы артабан да түбәнәйәсәк: төндә 0, -5 градустан -3,-8-гә тиклем, аяҙыҡтанда -13. Көндөҙ иһә -2, +3 градус. Метеорологтар фаразына ярашлы, 4-8 ноябрҙә республикала ҡар ятыуы көтөлә.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы төбәктәге яңы юғары килемле вакантлы урындар хаҡында хәбәр итә. Башҡортостандың Кушнаренко районында эшләү өсөн бүлек етәксеһе - өлкән суд приставы талап ителә. Радиоэлектрон аппаратура һәм 4-5 разрядлы приборҙар монтажсыһы Өфө приборҙар эшләү берекмәһендә 30-40 меңлек эш хаҡына иҫәп тота ала. "Симонов А.А." предприятиеһына Өфөлә эшләү өсөн өс йылдан кәм булмаған эш тәжрибәһенә эйә "Е" категориялы водитель талап ителә.

✓Мәктәп каникулдары алдынан Башҡортостан биләмәһендә 23 октябрҙә "Иғтибар - балалар!" операцияһы башланды. Иҫкәртеү саралары 10 ноябргәсә дауам итәсәк. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре балалар һәм уларҙың атаәсәләре өсөн юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге буйынса лекциялар, әңгәмәләр, дәрестәр, шулай уҡ конкурстар, викториналар һәм акциялар уҙғарасаҡ.

✓Башҡортостанда бешмә вирусы эҙемтәләрен бөтөрөү барышында 1,7 мең баш мал юҡ ителгән. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, Туймазы һәм Бүздәк райондарында теркәлгән бешмә вирусы Урта Азия төбәктәренән ваҡ мал менән килеп ингән. Бешмә - малдар араһында таралған хәүефле ауырыу. Сирҙең кешегә лә йоғоуы ихтимал. Ауырыуҙы дауаларға мөмкин. Бөгөнгә көнгә бешмә вирусы сығанаҡтары тулыһынса бөтөрөлгән, бөтә полигондар ҙа ябылған, тотош ҡойма менән кәртәләнгән һәм бер ниндәй хәүеф тыуҙырмай.

✓ Алыҫ тип тормай, баш ҡалабыҙҙың төрлө райондарынан ошонда йөрөүсе кескәйҙәр байтаҡ булып сыҡты. Бер ғаилә хатта Дим районынан фатир алһа ла, бала, үҙемдең баҡсаға барам тип ныҡышҡас, 221-гә йөрөтөүҙе дауам иткәндәр.



АФАРИН!

# БАЛАЛАРҘЫ БЫНДА...

## тыуған йорт йылыһы тарта



(Башы 1-се биттә).

Юҡ, мин баланы ла, уның әсәһен дә, баҡсаны ла яманларға йыйынмайым, тик бер һорауға яуап ҡына эҙләй инем. Йәйғор төҫтәргә буялған, әллә ҡайҙан уҡ балҡып үҙенә саҡырып ултырған әкиәт йортолай был баҡса, уның ишек алдындағы хатта өлкәндәр өсөн дә ылыҡтырғыс донъя: уйын майҙансыҡтары, бәүелсәкле беседкалары, спорт ҡоролмалары, хатта ике вагонлы паровозы ла баланы ҡыҙыҡтыра алмай микән ни?..

Кескәй күңелен әсир итеү өсөн былар ғына етмәй, күрәһең... Тик нимә? Арыуыҡтан бирле борсоған ошо һорауға мин баш ҡалабыҙҙың Орджоникидзе районына ҡараған 221-се башҡорт балалар баҡсаһында булып ҡайтҡандан һуң яуап таптым. Әллә ни яңы бина ла түгел, тыштан да ялтырап ултырмай, етмәһә, паровозы ла күренмәй: Өфөләге йөҙәрләгән башҡа шундай уҡ мәктәпкәсә учреждение тибындағы ҡәҙимге бер баҡса инде. Тик шуныһы ғәжәп тойолдо: алыҫ тип, яҡын тип тормай, баш ҡалабыҙҙың төрлө райондарынан ошонда йөрөүсе кескәйҙәр байтаҡ булып сыҡты. Бер ғаилә хатта Дим районынан фатир алһа ла, бала, үҙемдең баҡсаға барам, тип ныҡыша торғас, 221-гә йөрөтөүҙе дауам иткәндәр. Былдай хәлдең сере минә унда барып ингәс тә сиселде: тыуған өй йылыһы, ғаилә мөхите булдырылған бында, йәғни бала тыуған йортонан үҙенең тағы бер өйөнә килеп инә - шул ғына. Тупһанан үтеп, Өфө шарттарына күнегелгәнсә, урыҫса сәләмләүемә, "Һаумыһығыҙ!" тип күптәнге танышылай башҡортса ихласлап ҡаршы алған мөләйем йәш ҡатын - йыйыштырыусыны күргәс тә аңлашылды был. Балаларҙың башҡортса йырлап, шиғырҙар һөйләүен, матур, дөрөҫ итеп туған телдә аралашыуҙарын ишетеүҙән, хеҙмәткәрҙәрҙең алсаҡлығы, яғымлы мөғәмәләһенән, ысынлап та, яҡын туғандарың янына килеп ингәндәй булаһың.

Был башҡорт балалар баҡсаһына юғары категориялы педагог Ләйсән Усманова 13 йыл етәкселек итә. Мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы өлкәһендә ике тиҫтә йылдан ашыу бай эш тәжрибәһе бар. Үҙе кеүек, бала йәнле, эш өсөн янып торған дәртле, йәш коллектив туплаған. Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙағы иң ҙур һәм йәш быуынды милли рухта тәрбиәләүҙә иң уңышлы эшләүсе ошо 221-се баҡса үҙенең тыуған көнөн - ойошторолоуына 20 йыл тулыуҙы билдәләне. Өлкәндәрҙән бигерәк, балалар ныҡ әҙерләнгән байрамға: Башҡортостан - тыуған төйәк, туған тел, Салауат батыр тураһында сатнатып башҡортса шиғырҙар һөйләне, йырланы ла, ҡурай сәскәһенең тажын кейеп бейене лә кескәйҙәр. Өҫтәүенә, улар хатта ҡумыҙ сиртергә лә өйрәнгән! "Алыҫ булһа ла, Черниковка биҫтәһенән ҡыҙыбыҙҙы ошо баҡсаға йөрөтөүебеҙгә бик шатмын. Йәшәгән йортобоҙға яҡын баҡсаға бармаңы, бындағы тәрбиәсеһе Рәзилә Зиннур ҡыҙын бик ярата," - тип һөйләй 6 йәшлек Әмиләнең әсәһе Әлфиә Абдрахманова. Әмилә былтыр баш ҡалабыҙҙың Орджоникидзе районында халыҡ әкиәттәрен башҡортса һөйләү буйынса "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында еңеүсе лә булған хатта. Был, әлбиттә, баҡса тәрбиәһе һөҙөмтәһе. Киләһе йыл ул мәктәпкә йыйына. "221- се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре эргәләге 99-сы дөйөм белем биреү мәктәбенә уҡырға бара, - тип һөйләй Орджоникидзе район хакимиәтенең мәғариф һәм гуманитар мәсьәләләр буйынса идаралығы методисы Зөлхизә Вәлиуллина. - Милли мәктәп булмаһа ла, бында башҡорт теле дәресе инмәгән бер генә класс та юҡ. Һәм, ғөмүмән, 99-сы мәктәптә был йәһәттән бер ниндәй проблема юҡ. Мәктәп етәкселеге лә, район мәғариф идаралығы начальнигы Юлия Владимировна Мостафина ла мәсьәләнең асылын аңлап хәл итәләр, аңлашылмаусылыҡҡа юл ҡуйылмай..."

Ғәжәп хәл! Өфө буйынса ғына түгел, республика кимәлендә башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы булып ятҡан ығы-зығы еле был тарафтарға мәрхәмәт ҡылып, урап үткән, шөкөр. Күрәһең, ихласлап үҙ эштәрен башҡарыусыларҙың иғтибарын тарҡатырға теләмәгәндәрҙер, сөнки бында милләт айырып, милләт кәмһетеп, тасма-тас килеүселәр юҡ. Бары тик тыуған-үҫкән ерен яратырға, уның хаҡында тағы ла күберәкте белергә һәм киләсәктә ошо ерҙең ысын илһөйәрҙәре булып үҫергә өйрәтеүселәр эшләй бында.

Республика һәм бигерәк тә Өфө ҡалаһы мәктәптәрендә башҡорт теле урындағы милли ҡиммәттәргә төкөрөп ҡараусы агрессив төркөм ҡыҫымын кисергән мәлдәрҙә үҙ эшенең изге һөҙөмтәһен күрергә күнеккән коллектив аҡыллы бер сабырлыҡ менән балаларҙы халҡыбыҙҙың рухи хазиналары өлгөһөндә яҡшы кешеләр итеп тәрбиәләүҙе дауам итә, уларҙың күңелен байыта, киләсәккә әҙерләй. Эйе, хас та халыҡ аҡылы өйрәткәнсә - кемдер өрә, ә кемдер йөрөп тора. Кескәйҙәренең тап ошо баҡсаға килтерергә теләгән ата-әсәләрҙе мәктәпкәсә учреждение атамаһындағы "башҡорт" һүҙе өркөтмәй, киреһенсә, үҙенә саҡырып тороусы бер мәртәбә. "Ошо баҡса балалары әллә ҡайҙан айырылып тора: улар тәрбиәле, тәртипле, шуға рус милләтенән булһаҡ та, улыбыҙҙы махсус ошонда йөрөтәбеҙ", - тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер Юлия исемле йәш әсә.

Әйткәндәй, 221-се башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Ләйсән Абдулла ҡыҙы яңыраҡ өҫтәмә рәүештә асылған 6-сы төркөмгә хатта үҙ кабинетын биреп, үҙе методист тәрбиәсенең бәләкәй генә ҡыҫыҡ бүлмәһенә "өйҙәш" булып күсеүҙән дә тартынып тормаған, сөнки педагог аңлай: уның урыны ҡупшы кабинетта түгел, ә балалар араһында.

**Фирҙәүес ИШБИРҘИНА.**

БАШ ҠАЛАМ



# ИСЕМЕҢ... ХӘТӘР,

## кемдәр ҡушҡан?

**Сираттағы оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Өфө урамдарының һәм объекттарының атамаһына бәйле мәсьәләне күтәрҙе. 2014 йылдан алып ҡала территорияларына 171 атама бирелгән, шул иҫәптән 112 урамға, 36 тыҡрыҡҡа, 5 шоссеға, 3 яр буйына, 2 трактҡа, 2 проспектҡа, 1 аллеяға. Ошо йылдарҙа "Элитная", "Престижная", "Блестящая", "Знатная", "Богатая", "Лирическая", "Букетная", "Колыбельная", "Комфортная", "Молочная", "Млечного пути", "Доброй надежды" урамдары, "Золотой", "Озорной", "Дедушкин", "Милый" тыҡрыҡтары барлыҡҡа килгән. Ирек Ишмөхәмәт улы ҡала урамдарына исем биреүгә яуаплы ҡарарға һәм уйлап эш итергә саҡырҙы. "Башҡортостан" гәзите журналисы Таңсулпан Рәсүл ошо мәсьәлә буйынса фекере менән уртаҡлаша.**

- Беҙ Башҡортостан Республикаһында йәшәгәс, әлбиттә, уның баш ҡалаһының урамдары исеме матур, ә иң мөһиме, күңелгә яҡын булһын ине, тип теләйбеҙ. Тыуған илгә мөхәббәт тә ошо кескәй генә атамаларҙан башлана бит. Шуға ла, бөгөнгө ҡайһы бер "Вагонлы", "Веселый", "Изыскательская", "Конопляная", "Счастливая", "Узорный" тигәнгә ҡарағанда, үҙебеҙҙең ерлеккә, тарихҡа ярашлы, йә иһә шәхестәребеҙҙең исемдәрен урамдарға ҡушыу күпкә яҡшыраҡ булыр ине, тип иҫәпләйем. Әйткәндәй, Зәки Вәлиди, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина, Баязит Бикбай, Булат Рафиҡов, Әхмәт Лотфуллин, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Ғата Сөләймәнов, Салауат Юлаев, Дауыт Юлтый, Динис Бүләков һәм башҡа шәхестәрәбеҙҙең исемдәре ҡушылған урам, бульвар, проспект, тыҡрыҡтар бар ҙа инде. Әммә былар бигерәк аҙ, баш ҡалала һәр өлкәнән күренекле милләттәштәребеҙҙең, республикала тыуып үҫкән башҡа милләт шәхестәренең исемдәрен урамдарға ҡушыу мотлаҡ кәрәк!

Әйткәндәй, баш ҡалабыҙ урамдары исемдәре генә түгел, ҡаланың эргә-тирәһендәге утар, микрорайондарҙың урыҫса һәм мәғәнәһеҙ исемдәре лә эсте бошора. Өфөнән сыҡҡас, "Лебяжий", "Зубово", "Макроусово", "Чесноковка", "Искино", "Нагаево", "Кабаково", "Жилино", "Базилевка", "Верный" тигән ауылдарҙы үтәбеҙ. Ошолай, ер-һыу атамаларыбыҙҙың исемдәренә битарафлыҡ күрһәтеп, тыуған республикабыҙҙы үҙебеҙ үк ситкә әйләндерәбеҙ түгелме?

Башҡортостандың 100 йыллығы - урамдарға республикаға нигеҙ һалыусыларҙың исемдәрен биреү өсөн етди сәбәп. Бында тарихсыларҙың роле ҙур булырға тейеш, ә бит "Ульянов", "Ушаков", "Фурманов", "Чапаев"тан алда, Башҡорт автономияһына нигеҙ һалған Зәки Вәлиди уҙаманыбыҙ менән бергә Муллайән Халиков, Шәйехзада Бабич, Шәриф Манатов, ул ваҡыттағы билдәле эшмәкәрҙәр Булат Ишемғолов, Зәбихулла Исҡужин кеүек шәхестәрҙең исемдәрен мәңгеләштереү ҙә насар булмаҫ ине. Рәми Ғариповтың исеме ҡайһылыр ситтәрәк бер урамға ҡушылған тиҙәр, ләкин уны белеүселәр һирәк, нәҡ шул исемде үҙәк урамдарҙың береһенә алмаштырырға тәҡдим итер инем. Тағы ла, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Күсем Түләкәйев, Төлкөсура Алдағолов, Алдар Исәкәйев, Ҡәнзәфәр Усаев, Байыҡ Айҙар, Һары Мәргән, Ҡаранай Моратов кеүек бик күп шәхестәребеҙ бар, унан да ҡалһа, Мифтахетдин Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдин, Фәрит Иҫәнғолов, Ибраһим Абдуллин кеүектәр... Улар бихисап!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Артрит

❖ Был сара артрит, артроз, быуындың башҡа сирҙәренән файҙалы. Кисен эмаль кәстрүлдә ярты стакан һырғанаҡ майын йылытырға, 2 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ ваҡланған диңгеҙ тоҙо өҫтәргә. Һыҙлаған урындарға был майҙы һөрткәс, өҫтөнә дегәнәк япрағы, полиэтилен, йылы яулыҡ ябырға. Иртән торғас, компресты сисергә һәм тирене таҫтамал менән һөртөргә. Кисен тағы ла ҡабатларға. Һауыҡҡансы ошо ысул менән һыҙлаған урындарҙы дауалағыҙ.

### Йөрәк сирҙәре

❖ Йөрәк мускулы нығынһын, йөрәк ауыртыуҙан туҡтаһын өсөн энәлек емешен (боярышник) ваҡлап, уға ҡайнар һыу өҫтәп, төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр 50-шәр мл эсергә. Төнәтмәне оҙаҡ һаҡламағыҙ, һәр ваҡыт яңыһын әҙерләгеҙ.

### Алма

❖ Бешерелгән алма хроник эс ҡатыуҙан ҡотҡара. Ошо уҡ маҡсаттан өлкәндәргә һөткә һалып бешерелгән алма файҙалы.

❖ Алманың орлоғон да ҡулланалар. Ул яман шеш ауырыуҙарын булдырмай, был орлоҡтарҙа биологик әүҙем матдәләр, витаминдар, ферменттар күп. Алманың бер орлоғонда йодтың тәүлек нормаһы бар. Шулай ҙа орлоҡтарҙы күп ашарға ярамай, сөнки уларҙа ағыулы синиль кислотаһы була. Көнөнә 4 орлоҡтан артығын ашамағыҙ.

❖ Аҙ ҡанлылыҡтан, авитаминоздан, ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолоуҙан да алма ярҙам итә. Уның составындағы пектин матдәләр алышыуының яйға һала, кәрәкмәгән холестеринды организмдан сығара.

### Ангина

❖ 1 балғалаҡ балға 1 балғалаҡ прополистың спирттағы төнәтмәһен ҡушып, йоҡлар алдынан ҙур булмаған порцияларға бүлеп, ашарға. Ауыҙға алғас, бер аҙ тоторға кәрәк. 10 көн шулай дауалanғас, 1 аҙна ял итәһең дә, тағы 10 көн дауаланаһың.

❖ Яңы ғына һығылған лимон һутына 1 ҡалаҡ бал өҫтәп, 10 минут ауыҙҙа тотҡас, йоторға. Тулыһынса һауыҡҡансы дауаланырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ғүмеренә ҡурҡыныс янағаны

Мосолмандар Йәҫрибкә бәләкәй генә төркөмдәр менән күсенә. Ҡөрәйш мәжүсиҙәре быны күрһә лә, ҡыҫылмай. Улар бары тик Мөхәммәт бәйғәмбәр менән уның яҡындарын ғына ныҡлап күҙәтә. Тик Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе лә, Әбү Бәкер менән Ғәли ҙә, күренекле мосолмандарҙың башҡалары ла үҙҙәрен урынынан ҡуҙғалырға йыйынмаған да һымаҡ тота.

Ә был ваҡыт һижрәт дауам итә, Мәккә мосолмандары әҙәйгәндән-әҙәйә бара. Тотош йорттар, хатта кварталдар бушаған, Мәккә аҡһаҡалдары мосолмандарҙың тотошлай күсеп китергә теләүген аңлай. Был уларҙы борсоуға һала. Сөнки Йәҫриб - мосолмандарҙың бер өлөшө ҡасандыр күсеп киткән алыҫ Эфиопия түгел. Йәҫриб яҡында ғына ята, уның аша бер нисә каруан юлы үтә. Мосолмандар Мәккәлә йәшәгәндә уларҙы күҙәтеп, кәрәккән саҡта баҫым яһап йәки хөкөм итеп булһа, Йәҫрибкә күсенгәндән һуң улар өҫтөнән контроль юғаласағын аңлай башлай. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең иң яҡын өммәттәштәре - Ғүмәр менән Зәйедтең күсенеп китеүе айырыуса борсолоуға һала уларҙы.

Ашығыс рәүештә аҡһаҡалдар менән нәҫел башлыҡтарының кәңәшмәһе йыйыла. Әйтергә кәрәк, был кәңәшмәлә Әбү Ләһәб ҡатнашмай. Үҙе килмәйме, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең туғаны булғанға саҡырмайҙармы, билдәһеҙ.

Был кәңәшмәлә Әбү Джәхел Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе үлтерергә кәрәклеге тураһында телмәр тота. Башҡалар икеләнә, тик аҙаҡ ризалашалар.

Ошо урында шуны билдәләп үтергә кәрәк: уларҙың был ҡарары Иблестең сихри ҡотҡоһо арҡаһында ҡабул ителгән, тигән һүҙ һыҙыҡ өҫтөнә алына. Был иһә, уларҙың үҙҙәре кеүек үк көслө һәм тәүәккәл, аҡыллы һәм абруйлы, киләсәктә мосолман донъяһында дәрәжәле вазифалар биләгән тоҡомдары алдында кәңәшмәлә ҡатнашыусы ата-бабаларын нисек тә булһа аҡлау маҡсатында яһала.

Ҡарымта ҡанундары бер генә нәҫелгә көс төшөрмәһен өсөн, иң данлыҡлы ете нәҫелдең иң абруйлы ғаиләләренең ете яугиры Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе бер юлы үлтерергә лә, ҡарымта хоҡуғына эйә булған яҡын туғандарына ҡарымта хаҡын тиҙ арала бик күп итеп аҡсалата түләп ҡуйырға һөйләшә.

Кискә табан ете яугир Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең йортона юллана. Йортҡа инмәйҙәр - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең, ғәҙәте буйынса, ишек алдына сығып йоҡларға ятыуын көтәләр. Яугирҙарҙың береһе ишек ярығына ҡарай - Мөхәммәт бәйғәмбәр йорттоң эсендә, карауатта ята. Яугир уны йәшел еләне буйынса таный. Үҙ-ара һөйләшкәндән һуң яугирҙар уны иртәнсәк, таң атҡас үлтерергә була.

Таң атыуы менән Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең йортона килеп инәләр. Ләкин карауаттан Мөхәммәт бәйғәмбәр түгел, ә уның еләнен кейгән Ғәли килеп тора ла, аптырашта ҡалған яугирҙарға иғтибар итмәҫкә тырышып, йорттан йәһәт кенә сығып китә һала.

Был ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәнән ярайһы уҡ алыҫта була. Кис, ҡараңғы төшөү менән, ул еләнен ҡурҡыу белмәҫ Ғәлигә ҡалдыра ла, йортоноң артынан ҡойма аша һикереп сығып, тыҡрыҡтар буйлап Әбү Бәкерҙең йортона бара. Ҡаланан сығыу менән, арттарынан баҫтыра башлаyҙарын күҙаллап, Йәҫриб яғына түгел, ә бөтөнләй икенсе яҡҡа юлланалар ҙа, мәмерйәләрҙең береһендә йәшенәләр. Өс көн буйы шунда яталар, Әбү Бәкерҙең улы Әбдаллаһ менән ҡыҙы Әсмә уларға ашарға килтерә, ә яҡында Әбү Бәкер тарафынан иреккә ебәрелгән Әмир исемле элекке ҡол көтөү көтә.

(Дауамы бар).

О, СПОРТ!




# ҠАҒИҘӘҺЕҘ АЛЫШ...

## аяуһыҙ ҙа була, күрәһең

**Үткән аҙнала Өфөлә 2002-2003 йылғы егеттәр араһында ҡатнаш хәрби алыш (халыҡ-ара атамаһы - ММА, халыҡ телендә "ҡағиҙәһеҙ алыш" тип тә йөрөтөлә) буйынса Рәсәй беренселеге үтте. Ул Өфө ҡала округы хакимиәте, "Благомир" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ярҙамы менән Рәсәй Ҡатнаш хәрби алыштар берлеге һәм БР Ҡатнаш хәрби алыш федерацияһы тарафынан ойошторолдо. Ойоштороусылар билдәләүенсә, был турнир, ҡатнашыусылар йәше буйынса ҡарағанда, Рәсәй тарихында ла, ММА тарихында ла иң тәүгеһе. Йәғни, быға тиклем 18 йәше тулмағандар өсөн ММА спорты буйынса ярыштар ябыҡ булған. Ә ниңә үткәрергә булғандар һуң уны? Ни өсөн был тәүге тәжрибә тап Өфө иңенә төшкән? Мәҡәләбеҙҙә Рәсәй Ҡатнаш хәрби алыштар берлеге президенты, күп тапҡырҙар ММА буйынса донъя чемпионы Фёдор Емельяненконың ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптарын ишеттерербеҙ.**

Әйҙәгеҙ, бындай сараларҙа була торған рәсми сығыштарҙағы матур теләктәргә, ҡотлау һүҙҙәренә туҡталып тормай ғына (матур һүҙҙәр күп яңғыраһа ла), һандарға күсәйек. Турнирға Рәсәйҙең 26 төбәгенән 100-ҙән ашыу йәш спортсы килгәйне, улар 36-80 кг ауырлыҡ бүлемендә, 10 категорияла көс һынашты. Һандарҙы ла ситкәрәк ҡуйып торайыҡ. Артабан "Һуңғы император" тип ололап йөрөтөлгән ҡунаҡ - Фёдор Емельяненконың матбуғат конференцияһына күҙ һалайыҡ. Уға бирелгән тиҫтәләгән һорау араһынан бер нисәүһен генә алайыҡ әлегә. "Ни өсөн Өфөнө һайланығыҙ?" тигән һорауға Фёдор Владимирович: "Әлбиттә, беҙ, тәү сиратта, исеме есеменә тап килгән федерацияларға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Башҡортостан ММА Федерацияһы - билдәле федерация, уның президенты Руслан Булат улы Зарипов Рәсәй кимәлендә үткән ММА сараларында бик әүҙем ҡатнашып тора, шуға, был эште беҙ уға ышанып тапшырҙыҡ та инде", - тип яуап бирҙе. Ул һүҙ ыңғайында Өфөлә быға тиклем бер тапҡыр ҙа булмауын, әммә бында уның бик күп дуҫтары йәшәүен әйтеп үтте. "Кем ул һеҙҙең өсөн ысын батыр (боец)?" тигән һорауға, күп тапҡырҙар донъя чемпионы: "Үҙенең "мин-мин"леген еңә алған кеше, күңелһеҙ хәлдәрҙе, бәхәстәрҙе физик көс ҡулланмай ғына хәл итә алған кеше - батырҙарҙан-батыр", - тип, яуап бирҙе. Турнир барышында уның йәш спортсыларға: "Беҙҙең һеҙҙе яҡшы спортсылар итеп кенә түгел, ә яҡшы кеше булып етешеүегеҙҙе лә күргебеҙ килә", - тип әйтеүен айырым билдәләп китеү кәрәктер.

Ә турнир нисек, ниндәй кимәлдә ойошторолдо һуң? Өфө ҡалаһы исеменә лайыҡлы уҙғарылдымы, судьялар ғәҙел баһа бирҙеме? Был турала профессиональ боксёр, бокс буйынса Рәсәй чемпионы, Ҡабарҙы-Балҡар республикаһы йыйылма командаһының баш тренеры Ханлар Азизовтан да яҡшыраҡ әйтеп булмаҫтыр. Ул беҙгә былай тине: "Үтә шәп, үтә һәйбәт сара ойоштороғандар бөгөн. Ныҡ оҡшаны. Мәсьәләгә һөнәри ҡараш ярылып ята. Әйтәйек, балаларҙың елкәләре нығынып етмәүен иҫәпкә алып, тынды быуыуҙы, партерҙа айҡашҡан ваҡытта дөгәүсенең башына һуғыуҙы тыйып, бик дөрөҫ эшләгәндәр. Ятҡан кешегә йоҙроҡ тейһә, ныҡ тейә, оло кеше лә был көсөргәнешкә түҙмәй китә. Фёдор Емельяненконың был ҡарары әллә күпме тән йәрәхәттәрен алдан иҫкәртте. Судьялар бик ғәҙел баһаланы. Мин бит күп йөрөйөм, төрлө хәлдәргә осрағаным бар. Бында һинең кем булыуыңа, ниндәй дин тотоуыңа иғтибар ҙа итмәйҙәр. Малайҡай дөгәүсеһен еңде икән, һис һүҙһеҙ - еңеүҙе уға бирәләр. Минең бер егетем, минең уйымса, финалда еңеп барған һымаҡ ине, судьялар еңеүҙе уның дөгәүсеһенә бирҙе. Беҙ барыбыҙ ҙа тәүҙә аптырабыраҡ ҡалдыҡ, ләкин, турнирҙың ниндәй тырышлыҡ менән, ниндәй һөнәри кимәлдә үтеүен, уны кем үткәреүен иҫкә төшөрөп, дөгәүләшеп торманыҡ. Ахырҙа, үҙебеҙҙең егеттәр төшөргән видео-яҙманы ҡарап, егетебеҙҙең икенсе раундта мәрәйҙәр һаны буйынса ҡалышыуын күрҙек. Матди яҡҡа килгәндә, беҙ ҙә, башҡалар ҙа үҙ аҡсабыҙға килдек, беҙгә ата-әсәләр ныҡ ярҙам итте. Бағыусылар ярҙам итһә, бер йыл эсендә арыу уҡ үсешер инек. Әлегә Ҡабарҙы-Балҡар республикаһында был өлкәлә ҡытлыҡ ҙур". Ханлар Азизов алып килгән 4 егеттең 2-һе - 1-се, 1-һе - 2-се урын алды. Ошо 4 егеттең 3-һөн ул үҙе тәрбиәләгән. Беҙ унан, бындай сифатлы эшегеҙҙең сере нимәлә, тип һораныҡ. Тренер: "Мин үҙемдең балаларымды, үҙем нисек шөғөлләндем, шулай тәрбиәләйем. Ҡалған серҙәрҙе асып тормайым", - тине.

Һөҙөмтәне әйтеп китәйек: командалар араһында иң көслөһө тип Силәбе өлкәһе спортсылары лайыҡлы баһаланды, икенсе урын Башҡортостан командаһына бирелде, ә өсөнсө баҫҡысты омскиҙар яуланы. Башҡортостан йыйылма командаһының баш тренеры Руслан Йәнбирҙин әйтеүенсә, беҙҙекеләрҙең 1-се урын ала алмауының сәбәбе элекке баш тренерҙың команда менән эшләмәүенә бәйле. "Мине, күп булһа, 1 ай элек кенә тәғәйенләнеләр. Йәл, ваҡыт әҙерәк булды шул", - тип әсендә баш тренер.

Башҡортостан командаһында Сибай ҡалаһының 9-сы лицейы уҡыусыһы Салауат Маннапов та бар ине. Ул беҙҙең һорауға яуап итеп, киләсәккә уй-хыялдары менән уртаҡлашты. "Килеп сыҡһа - спортсы, был хыялым барып сыҡмаһа - хәрби һөнәр һайларға уйлайым", - тине егет. Салауат батырға уңыштар теләйек. Һау булһаҡ, уның уңыштарын да күрербеҙ әле!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кем - нисектер, әммә мин был турнирҙы ҡарағанда балаларҙы йәлләп бер булдым. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: зал тулы оло кешеләр малайҙарҙың һуғышҡанын ҡарай, ике яҡта ике тренер малайҙарға нисек һуғышырға, нисек еңергә икенен ҡысҡырып, аңлатып ултыра. Китегеҙсе! Тәүге сығышта уҡ, бер егет "техник нокаут" менән еңелде. "Техник нокаут", тип әйтеүе генә анһат. Уның: "Тубығым! Тубығым шырт итте!" - тип, ярҙам һорап ыңғырашыуын, унан - тубығына ниндәйҙер баллондан бер нәмә һиптереүҙәрен, хәрәкәтһеҙ, хәлһеҙ үҫмерҙе дүрт кешенең носилка менән алып китеүен күреү был спорттың ни тиклем аяуһыҙ икәнен ишараланы. Әҙемтәләре тураһында уйлауы ла ҡурҡыныс. 14-15 йәштә был спорт менән ныҡлап шөғөлләнеү иртәрәктер, бәлки, тигән һорау һаман тынғы бирмәй. Хәйер, ММА спорты тигән оло тәгәрмәс күптән өйөрөлә бит инде. Руслан Йәнбирҙин әйтмешләй, "Велосипеды күптән уйлап тапҡандар. Ултырырға ла, алға китергә генә кәрәк". Моғайын, ул хаҡлылыр. Ә шулай ҙа...**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

✓ Академик Миллерҙың яҙмаларынан күренеүенсә, башҡорт ерҙәре бөгөнгө Себерҙең Төмәненә бер аҙ ғына барып етмәгән. Көнбайыш сиктә иһә данлыҡлы Зәй шишмәһе лә беҙҙең ерҙәргә ингән.



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Башҡорт халҡының тарихын төплөрәк өйрәнгән һайын ниндәйҙер яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр асыла бара. Уны бары ҡалыплашҡандан айырып, яратып, үҙ итеп өйрәнергә генә кәрәк. Ошондай фекерҙә хөрмәтле шәхесебеҙ, тарих фәндәре докторы Нәзир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИН. Беҙ ҙә уның был фекере менән килешәбеҙ һәм уның бәйәнендә гәзит уҡыусыларыбыҙға тарихыбыҙҙың ҡайһы бер ҡыҙыҡлы биттәре менән танышырға тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕҘҘЕҢ ХАЛЫҠ КҮСМӘ ТҮГЕЛ,

## ә сауҙәгәр ҙә, игенсе лә, сәнәғәтсе лә булған



**➔ Башҡортто күсмә халыҡ итеп тә, ултыраҡ тормошло итеп тә иҫбатлаусы яҙмалар күп. Ошо юҫыҡта һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?**

- Тарих оҙаҡ йылдар башҡортто күсмә халыҡ итеп күрһәтеп килде. Хатта әллә күпме башҡорт ҡалалары хаҡындағы мәғлүмәттәргә ҡарамай, ҡайһы бер төрки халыҡтары менән тиңләп, әле лә беҙҙе "күсмә" тип нарыҡлаусылар етерлек. Был башҡорт халҡының тарихын әлегә тиклем бик тар күҙлектән ҡарауыбыҙҙан килә. Дворян-буржуаз тарихсыларҙың "Шул-шул халыҡ ер эшкәртмәгән, иген сәсмәгән, сауҙа итмәгән һ.б." тип яҙған тәғлимәттәренән сығып фекер йөрөттө заманында совет тарихсылары һәм һаман да шуға эйәрә хәҙерге ғалимдар ҙа. 1795 йылда үткәрелгән генераль межевание, йәғни ер үлсәү материалдарында, 18-се быуат аҙағында ер эшкәртеү менән таныш булмаған, тип иҫәпләнгән төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының (Ҡурған, Екатеринбург башҡорттары) йән башына һөрөлгән ере урыҫтыҡынан да, татарҙыҡынан да күберәк була. Шул генераль межевание материалдарының "Иҡтисади иҫкәрмә" тигән бик бай сығанағы бар. Шул сығанаҡҡа ҡарағанда, урыҫтарҙа бер хужалыҡҡа 5-6, татарҙарҙа - 3-4, ә башҡорттарҙа 10-12 дисәтинә һөрөлгән ер тура килгән. Ошо мәғлүмәт кенә лә башҡорттоң күсмә йәки ярым күсмә булыуын инҡар итә.

Бөгөн шәп йөрөгән машинаға ултырып, башҡорт ерҙәренең көньяҡ сигенә сыҡһаҡ, мәҫәлән, Ырымбурҙың Соль-Илецк районынан төньяҡҡа, Пермгә тиклем егерме биш километр ҡалған урындағы Ҡуян тигән башҡорт ауылына тиклем сама менән 800 километр тирәһе юл үтәһең. Ә теге заман башҡорттары был ерҙәрҙе ат өҫтөндә йөрөп ҡарарға, тәрбиәләргә, һаҡларға тейеш булған. Ә башҡорт ерҙәренең көнсығыш яғында, академик Миллерҙың яҙмаларынан күренеүенсә, башҡорт ерҙәре бөгөнгө Себерҙең Төмәненә бер аҙ ғына барып етмәгән, шул урындарҙа башҡорт йәйләүҙәре булған. Көнбайыш сиктә иһә данлыҡлы Зәй шишмәһе лә беҙҙең ерҙәргә ингән. Был майҙан эсенә Дания, Голландия кеүек бер нисә Европа иле инеп ултырыр ине. Шулай булғас, ошо ҡәҙәре ерҙәр биләгән башҡорт нисек итеп бер генә формалы социаль-иҡтисади үҫештә була алһын?

Заманында Раил Кузеевтың тарихи тикшеренеүҙәрен шелтә менән ҡабул иттеләр, ә бит уның һүҙҙәре дөрөҫкә сыға. Көнбайышта башҡорттар ер эшкәртеүселәр, көньяҡ-көнсығышта - ярым күсмә, йәғни миҙгел менән мал күсереп йөрөтөүселәр, ерҙәрҙең өстән бер өлөшөн биләп торған урман буйы халҡы урман кәсептәре менән йәшәгән. Артыҡ алыҫҡа китмәй, 17-18-се быуаттарҙы ғына алып ҡарағанда ла, башҡортто бер генә төрлө социаль төркөмдә торған, тип һис тә раҫлап булмай.

**➔ "Бер генә социаль төркөмдә торған, тип әйтеп булмай" тигәндә, башҡорттарҙың ер эшкәртеүҙән тыш, тағы ла ниндәй кәсептәрен күҙ уңында тотаһығыҙ?**

- Һуңғы бер 25 йыл арауығында башҡорттарҙың сәнәғәт кәсебе менән дә шөғөлләнгәнен иҫбатлаған материалдар тупланым. Был хәҡиҡәтте Рәсәйҙәге генә түгел, Рәсәйҙән ситтә булған ғалимдар ҙа ҡабул итте. Шул тикшеренеүҙәрҙән һуң Санкт-Петербургтың тау университетына "Был университетты башҡорт сәнәғәтсеһе Исмәғил Тасимов һалдырған" тигән таҡтаташ элдек. Шулай итеп, милләттәшебеҙҙең хеҙмәтен Рәсәй кимәлендә баһаланыҡ. Шундай уҡ таҡтаташ Сибай политехник колледжында ла тора.

Бер архив документтары буйынса, заманында башҡорттар Себерҙең Ирбит йәрминкәһенә барып, көтөү-көтөүе менән ат һатҡандар. Тимәк, улар сауҙаны ла яҡшы белгән. Яҙмаларҙа, башҡорттар бер килгәндәрендә 400 башҡа тиклем мал ҡыуалар, тип яҙыла.

Екатерина II заманында Уложенная комиссия төҙөлөп, дәүләт архивындағы бөтөн юридик документтар яңыртыла. Шунда Ҡарғалы татарҙарының бер наказы була (үҙ күҙҙәрем менән күрҙем). Ошо ҙур күләмле наказда татар сауҙагәрҙәре былай тип яҙа: "Губернатор беҙҙе өй ҡыйыҡтарын һалам менән ябырға ҡуша, әммә беҙ быға ҡаршы. Янғын булғанда был фасадтар шундуҡ янып бөтәсәк. Беҙҙә арыш үҫтерелмәй, тик бойҙай үҫтерәбеҙ. Бойҙай һабағы ҡыҫҡа һәм уның менән ҡыйыҡ ябып булмай. Беҙ өй баштарын дранкы менән ябабыҙ, уларҙы башҡорттар ылау-ылау итеп килтереп һата. Аңлатма: башҡорттар урмандағы ҡарт ағастарҙы киҫеп, шуларҙан дранка яралар". 18-се быуатта Ырымбурҙа 500 ихата була, ә Ҡарғалыла - 550 хужалыҡ, йәғни был ауыл Ырымбурға ҡарағанда ла ҙурыраҡ булған. Һәм шундағы өйҙәрҙең башын ябыу өсөн башҡорттар һатҡан материалды файҙаланғандар. Тимәк, әллә ҡайҙа ятҡан урман башҡорттары дала яҡтарын ағас материалдары менән дә тәьмин иткән.

Рычковтың яҙмаларындағы "ҡырағай, ярым күсмә, наҙан, дыуамал" башҡортто кәүҙәләндереп, шул күҙлектән сығып яҙылған ғилми хеҙмәттәр тәҡдим итеп, әллә ниндәй түбән менталитет уйлап сығарып, башҡорт тарихын беҙҙең үҙебеҙҙең "белемселәр" болғап ташланы ул. Был хата ғына түгел, ҙур гонаһ. Халыҡ алдындағы, милләт алдындағы гонаһ.

**➔ Тарихи материалдарҙағы хәҡиҡәттән ситләшеү, йәғни хаталар ебәреү нимәнән килә һуң?**

- Буржуаз осорҙа тарихсыларыбыҙ артыҡ күп булманы, ә совет осоронда, уларға нисек ҡушылған, шулай яҙылды тарих. Бөгөн шарттар бөтөнләй икенсе, иркенлек, архивтарға ишектәр асыҡ, әммә тарих фәнендә яҙыу һәм тикшеренеү өлкәһендә артыҡ үҙгәрештәр күҙәтелмәй. Партия бәпләүенән ысҡынған ғалимдарыбыҙ ҡайһы яҡҡа ҡарай юл алған булһа, уңына-һулына ҡарамай, тик бер йүнәлештә китеп тик бара. Кандидатлыҡ диссертацияһына ниндәй тема алған булһа, шул теманы үлгәнсе яҙа ла яҙа. Башҡа темаларға уның фекере лә, ҡыҙыҡһыныуы ла юҡ. Ә беҙҙең милләттең дә, республиканың да тарихы бик ҡатмарлы. Бер хәл-ваҡиғаны ла, хатта бер генә герой тормошон да дөйөм тарихтан айырып ҡарап булмай. Киң даирәлә, бөтә өлкәләрҙә лә ғилемле булыу зарур. Мәҫәлән, билдәле Мәскәү ғалимдары бер ваҡытта ла бер тема менән генә сикләнмәгәндәр. Беҙгә һөргөнгә ебәрелгән тарихсы Любавскийҙы ғына алайыҡ, ул Рәсәйҙең 16-17-се быуат тормошон өйрәнә лә, бында килгәс, башҡорт ихтилалдары, ер эштәре һәм тағы ла бер-нисә йүнәлеш буйынса тикшеренеү эштәре алып бара. Баҫылып өлгөрмәгән өс монографияһы ятып ҡалған уның. Ә бит ул бында тыумаған да, үлгәнсе йәшәмәгән дә, бары нисәлер йылын ғына үткәреп киткән. Тимәк, тарихсы булараҡ, уның уйлау даирәһе, эҙләнеү тәрәнлеге киңерәк һәм тәрәнерәк булған. Үҙебеҙҙең дә шундай ғалимыбыҙ булған - Әбүбәкер Усманов ул. Уның да донъя күрмәгән материалдары архивта ята. Күп төрлө йүнәлештәрҙә эшләгән, төплө фекерле ғалим булған. Был исемлеккә тағы ла Нияз Мәжитовты, Раил Кузеевты, Билал Юлдашбаевты индерер инем. Беҙ инде олоғайғанбыҙ, артыҡ йөк һөйрәр әмәл юҡ. Ә бына йәш ғалимдарыбыҙға бер темаға ғына ҡанығыу алымын ҡуйырға кәңәш итер инем.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Сабандар

Сабан ҡәбиләһе хаҡында мәғлүмәт бик аҙ. Бахши Иман яҙыуынса, Иҙел һәләк булғандан һуң уның улдары араһында һуғыш башлана. Бының менән ғәскәр башлығы Бүлемәр (Баламбир) файҙалана. Ул Ҡама батырҙың ҡыҙы Туранбикәгә өйләнеп, Иҙелдең батша тәхетен яулай. Аландар династияһынан Суварҙың улы Мәджи килә, һәм мәсәғүттәр йоғонтоһо көсәйә.

Һаҡмарҙан Ғазан тауҙарына тиклем 80 көн. Бында сабандарҙың тыуған иле, шуға күрә был түбә Сабандар түбәһе тип атала. Уның үҙәге -Ҡыуаҡбаш. Иҙелдең беренсе батшаһы Дуло нәҫеленән Ағаржа (150-189 й.й.) сабандарҙың тарханы булған, уның улы Бараҡ, Бараҡтың улы Барынйәр (235-271 й.й.). Сабандарҙың иҫке ҡалаһы бәшәнәктәре Баласағун (хәҙерге Балашейка) ҡалаһына нигеҙ һала. "Бәшәнәк" атамаһын сабандар Дуло ҡәбиләһенә буйһоноу билгеһе итеп ҡабул итә. "Бәшәнәк"те улар "бей һәнәк"тән алынған тип иҫәпләй, ул Турандың һөйөү билдәһе һаналған. Боронғо заманда Туран Волга-Урал буйында Туран дәүләте төҙөргә маташа. Дуло ырыуы хакимдары үҙҙәрен Туран вариҫтары тип һанаған. "Саҡ", "сағун" бәшәнәксә "болғансыҡ" тигәнде, "баласағун" "ярты-лаш болғансыҡ" тигәнде аңлата. Һаҡмар сабанса "болғансыҡ йылға" тигәнде аңлата. Һамар түбәһендә бәшәнәктәрҙең вариҫтары йәшәй.

635 йылда Төрөк ҡағанаты емерелеүен файҙаланған Курбат төрөктәрҙән иҙелдәрҙең боронғо ерҙәрен (Волга буйы, Себерҙең бер өлөшө, Ҡаҙағстан һәм Кавказ алды) кире ҡайтарып ала. Ҡара Болғарҙар составында булған Мардуандан көнсығыштараҡ урынлаша һәм уларға буйһона. Улар бында ҡатындары һәм балалары менән килә.

760 йылда Тат Өсөк үҙенә Мардуанды буйһондороп, Болғар тип атай. Ер эшкәртеүсе сабандар уларға буйһона, ә бына малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе сабандар Ағиҙелдең үрге ағымына табан китеп, бектарҙың власына ҡаршылыҡ йөҙөнән үҙҙәрен бөрйәндәр тип атай башлай. Тат Өсөктөң ҡара болғарҙары сабан ҡыҙҙарына өйләнеп, туран һәм ҡыпсаҡ телендә һөйләшә башлай. Туранда тороп ҡалған сабандар күп осраҡта үҙҙәрен бәшәнәк тип атай. Сабандарҙың төркисә ҡушаматы - бәшәнәктәр. Был территорияла бер нисә быуат йәшәп, улар күп кенә ҡәбиләләрҙең сыуалыштарында ҡатнашҡан. Уларҙың бөрйәндәрҙең, сабандарҙың, бершудтарҙың баҙарҙарында сауҙа урындары булған. Бер заман баш күтәргән ҡара уймаҡтар (ҡара ҡыпсаҡтар) менән кәңәшләшеп, сабандар үҙҙәренә айырым провинция төҙөп, идараны Түргән ханға тапшырырға ҡарар итәләр. Был саҡта тик ҡомандарҙың Башҡорт ханы ғына, Үтәккә таянып, үҙаллы булып ҡала. Һөҙөмтәлә Бохара йәки Хөрәсән юлы уның контроле аҫтына күсә.

Сабандар - малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбилә булараҡ, малдары көтөүгә сыҡҡан мәлдә тәбиғәттең уяныу хөрмәтенә ат сабыштары, малсыларҙың бил көрәшен, ир-аттарҙың аяҡ тышап ярышыуын ойошторған. Сабандарҙың туйҙары, хәҙерге заман кешеләре әйткәнсә, бер нисек тә һабан менән бәйле түгел. Шулай итеп, Һабантуй байрамына сабандар нигеҙ һалған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Уңыштың нигеҙе күпселектә ҡараш киңлегенә һәм эрудицияға барып ялғана. Шуның өсөн дә күп уҡырға, ҡыҙыҡһынырға - быларҙың барыһын да үҙ ваҡытында эшләргә - мәктәптә башлап, ғүмер буйы дауам итергә кәрәк.***

# ЫСЫН БӘХЕТТЕ...

## маҡсатыңа ҡарай хәрәкәт иткәндә табаһың

**Бөгөн гәзит уҡыусылар иғтибарына уңышлы йәш кеше менән әңгәмә тәҡдим итмәксебеҙ. Ҡунағыбыҙ - Денис Булат улы ЙОМАДИЛОВ - әле йәш (29 йәшлек) булыуына ҡарамаҫтан, әллә күпме юғары дәрәжәләргә өлгәшкән, бик күп эштәр атҡарып өлгөргән. Һанап киткәндә, ул: БР Адвокаттар палатаһы Вице-президенты ла, БР Адвокаттар коллегияһы рәйесе урынбаҫары ла, БР Йәмәғәт палатаһы ағзаһы ла, Рәсәй Юристар ассоциацияһының Башҡортостан Йәш юристар советы рәйесе лә. Әңгәмәбеҙ йәш кешенең уй-фекерҙәре, булмышы, донъяға ҡарашы тирәһендә барасаҡ.**

**▸ Һүҙебеҙ башында, ғәҙәттәгесә, тыуған төбәк, атай-әсәй, бала саҡ хыялдары, ғаиләгеҙ тураһында һөйләп үтеү урынлы булыр, моғайын...**

- Белорет ҡалаһында тыуғанмын, унан ғаиләбеҙ Мәсетле районы үҙәге Оло Ыҡтамаҡ ауылына күскән. Оло Ыҡтамаҡта атайым - судья, әсәйем нотариус булып эшләне. Артабан Сибай ҡалаһында йәшәнек. Сибайҙа мин беренсе синыфҡа уҡырға барҙым. Йыл ярым башҡорт лицейында уҡығандан һуң, 1-се урта мәктәпкә күстем. Унда 6-сы синыфҡа тиклем уҡыным да, атайым менән әсәйем мине Өфөләге Башҡорт-төрөк лицейына уҡырға инергә күндерҙе. Бының өсөн мин уларға сикһеҙ рәхмәтлемен. Унда мин ике йыл уҡыным. Лицейҙа бөтөн предметтар ҙа тиерлек инглиз һәм төрөк телдәрендә уҡытылды. Шул арҡала мин туған башҡорт телем һәм рус теленән тыш, тағы ошо ике телде үҙләштерҙем. 2003 йылда ғаиләбеҙ менән Өфөгә күстек, урта мәктәпте баш ҡаланың 31-се мәктәбендә тамамлап ҡуйҙым.

Минән: "Һин ҡайһы райондан?" - тип һораһалар, мин һәр ваҡыт ғорурлыҡ менән: "Мин - республиканан!" - тип яуап ҡайтарам. Был һүҙ уйнатыу йәки маһайыу түгел. Бәләкәй Ватан төшөнсәһе минең өсөн күп ҡырлы һәм Белорет, Мәсетле, Баймаҡ райондарын, Сибай, Өфө ҡалаларын үҙ эсенә ала. Былар - минең тыуып-үҫкән ерҙәрем. Һеҙҙә: "Ә ниңә Баймаҡ районы?" - тигән һорау барлыҡҡа килергә мөмкин. Әсәйем яғынан ҡартатайым менән өләсәйем ғүмер иткән Сыңғыҙ ауылын да мин тыуған ерем тип иҫәпләйем. Ҡартатайым - Рәүеф Ғәлләм улы Бикташев - ошо ауылда уҡытыусы булып эшләгән, аҙаҡ директор вазифаһын атҡарған. Уның уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеге тураһында был яҡтарҙа әле лә йылы итеп иҫкә алалар. Өләсәйем - Мөьминә Вәли ҡыҙы Бикташева - халыҡ мәғарифы отличнигы. Ул шулай уҡ һәүәҫкәр композитор ҙа. Ул әле булһа бик матур йырҙар яҙа. Минең музыкаға ылығыуым да - өләсәйемдән. Өлкән кластарҙа уҡығанымда мин клуб музыкаһы яҙыу менән мауыҡтым. Ул ижад емештәрем киң йәмәғәтселеккә билдәле булмаһа ла, дуҫтарым менән тыңлап йөрөй торғайныҡ.

Минең башҡорт телен яҡшы белеүем, тәү сиратта, атай-әсәйемдең, олатай-өләсәйемдең тәрбиәһе һөҙөмтәһе. Йәйге каникулда ауылға барһам, башҡортсаны иҫкә төшөрөп, туған телгә ныҡлы ылығып китәм дә, йәй аҙағына иһә руссаны онота торғайным.

Ғүмеремдең тәүге йылдары сағыу бала саҡ тәьҫораттарына бай булһа ла, киләсәк тураһында, буласаҡ һөнәрем хаҡында бик иртә уйлана башланым. 7-се синыфта уҡыған сағымда уҡ мин үҙемдең атай-әсәйем юлынан - юрист һуҡмағынан барырымды белә инем. Шуға ла һөнәр һайлау бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырманы. Урал дәүләт юридик академияһын тамамлағас, мин Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисад университетында лекциялар уҡыным. Юридик фәндәрҙән белем биреү менән бер рәттән, мин адвокаттар коллегияһында стажировка үттем, һөҙөмтәлә, адвокат имтиханын уңышлы тапшырып ҡуйҙым.



***ДЕНИС ЙОМАДИЛОВ:***

*Минән: "Һин ҡайһы райондан?" - тип һораһалар, мин һәр ваҡыт ғорурлыҡ менән: "Мин - республиканан!" - тип яуап ҡайтарам. Был һүҙ уйнатыу йәки маһайыу түгел. Бәләкәй Ватан төшөнсәһе минең өсөн күп ҡырлы һәм Белорет, Мәсетле, Баймаҡ районДарын, Сибай, Өфө ҡалаларын үҙ эсенә ала. Былар - минең тыуып-үҫкән ерҙәрем.*

Уңышлы кешенең тормошо уның ниндәй белемгә эйә булыуына ғына бәйле түгел, ә ауыр саҡта ярҙамға килергә әҙер торған яҡын кешеләрҙең булыуына ла бәйле икәнен сурытып, әйтеп тормайым. Ғаиләм һәм ышанысллы дуҫтарым тураһында һүҙем. Ошо йәһәттән мин бәхетле кеше, сөнки бынамын тигән ҡатыным (ул Ҡырмыҫҡалы районынан) һәм ике ғорурлығым - улым һәм ҡыҙым бар. Ғаиләлә балалар ни тиклем күберәк - ғаилә лә шул тиклем нығыраҡ, байрамдар ҙа күңеллерәк була, тип һанайым. Әле кәләшем менән ғаиләбеҙҙе ишәйтеү тураһында ла уйлашабыҙ.

**▸ Һеҙҙең йәш кенә көйө ошондай уңыштарға өлгәшеүегеҙҙең сере нимәлә икән?**

- Был, тәү сиратта, ғаиләбеҙгә бәйле. Беҙҙең ғаилә балаларға әхлаҡи тәрбиә биреү йәһәтенән бик көслө. Атай менән әсәй беҙгә тәртип, әхлаҡлылыҡ нимә икәнен үҙ өлгөһөндә күрһәтте. Миңә улар ҡуйған маҡсатҡа ынтылыш ғәҙәте һалынды. Шул уҡ ваҡытта улар мине ниндәйҙер сиктәргә лә бикләмәне, ҡәтғи талаптар ҡуйманы, һайлау мөмкинлеге бирҙе. Бала, үҫмер, йәш саҡтан мин кешеләр менән аралашырға, кешеләрсә йәшәргә өйрәндем, оло тормош мәктәбе үттем. Ирекле итеп, шул уҡ ваҡытта ныҡлы әхлаҡ нигеҙҙәрендә тәрбиә биргәндәре өсөн атайым менән әсәйемә тағы бер рәхмәтемде еткерәм.

Ҡайһы бер йәш ата-әсәләр балаларын үтә ныҡ ҡайғырта, әпәүләй. Баланы ныҡ ҡайғыртһаң, ғүмер буйы ҡайғыртырға тура киләсәк. Тәүҙән үк үҙаллылыҡ бирһәң, бала үҙаллы йәшәп ала ла китә. Ул үҙаллы аҡса эшләй башлай. Ә был атай-әсәй өсөн ғорурлыҡ ҡына - йөк түгел.

Уңыш тураһында шуны айырып әйтергә кәрәк: минең әлеге халәтемә мәктәп менән университет та ғәйәт ҙур йоғонто яһаны. Үҙемдең белем алыу осоромда мин 4 мәктәп алыштырҙым, академия менән аспирантура тамамланым. Ә был 6 төрлө коллектив һәм бихисап уҡытыусылар менән мөғәмәлә итеү бит инде. Һәр уҡытыусының психологик алымдары, тәрбиә ысулдары, донъяны ҡабул итеүе үҙенсә. Уҡытыусыларымдан мин тормоштоң күп ҡырлы икәнен аңлаһам, синыфташтарым һәм коллегаларым миңә, үҙҙәре үк донъя психологияһы сағылышы булараҡ, әһәмиәтле һабаҡ бирҙе. Былар барыһы ла миңә тормош юлымды дөрөҫ һайларға ярҙам итте.

Уңышҡа өлгәшеү юлында кешенең үҙенең ныҡышмаллығы ла мөһим. Тирә-яҡтағылар һине нисек ҡабул итеүе, һиңә нидәй ҡараштa булыуы күп осраҡта һинең үҙеңә бәйле. Уңыштың нигеҙе күпселектә ҡараш киңлегенә һәм эрудицияға барып ялғана. Шуның өсөн дә күп уҡырға, ҡыҙыҡһынырға - быларҙың барыһын да үҙ ваҡытында эшләргә - мәктәптә башлап, ғүмер буйы дауам итергә кәрәк.

Бер уйлаһаң, мәктәп тә, университет та кешегә белем генә бирмәй, - тәрбиәләй ҙә. Кеше өсөн белем - бер, ә тормош һынауҙарын лайыҡлы үтеү, үҙ юлыңды табыу - икенсе, бәлки, тәүгеһенә ҡарағанда ла мөһимерәк мәсьәләләр. Шуға ла, Башҡорт-төрөк лицейы миндә бары тик яҡшы тәьҫораттар ғына ҡалдырҙы. Ул лицейҙың уҡытыусылары иһә, һәр уҡыусыға шәхес тип ҡараны, һәр кемгә иғтибарын йәлләмәне. Дәрестән һуң бөтә уҡыусыларҙы ла сәйгә йыйыу ғәҙәте бар ине. Сәй эскәндә һөйләшеп ултырыу сит телгә өйрәнеп китеүҙе тиҙләтә, был эште ябайлаштыра. Миңә тормошта ныҡ кәрәге тейгән инглиз һәм төрөк телдәрен өйрәткән төрөк уҡытыусыларыма рәхмәтлемен. Ниндәй генә сит илдә булһам да - Төркиәләме, Израилдәме, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендәме - тел ҡаршылығы тоймайым. Күп телдәр белеү мейегә лә файҙаға ғына. Иң ҡыҙығы шул: һәр телдең һөйләм төҙөлөшө үҙенсәлекле. Әгәр һин бер үк фекерҙе төрлө телдәрҙә шул килеш еткерә алаһың икән, был һәләтең һинең фекерләү офоҡтарыңды шаҡтай киңәйтә. Шуға, башҡорт йәштәренә: "Туған телдән тыш, сит телдәрҙе лә өйрәнегеҙ, төрлө телдәрҙә йырҙар йырлағыҙ, төрлө халыҡтарҙың бейеүҙәрен бейегеҙ. Был һеҙҙе үҫтерер, тормошта ныҡ ярҙам итер", - тип өндәшке килә.

Мин 2 бала атаһымын, юрист эшмәкәрлегемдә лә, йәмәғәт тормошонда ла ниндәйҙер уңыштарым бар. Ә шулай ҙа барыһы ла алда һымаҡ тойола. Һәм мин шундай аңлауға киләм: һине алда ниндәйҙер еңеллек көтә, тип, үҙеңде бушҡа өмөтләндерергә кәрәкмәйҙер. Беҙ мәктәптән һуң юғары уҡыу йортона инеүҙе көттөк, юғары уҡыу йортонда саҡта тиҙерәк эш башлауҙы теләнек. Ысын бәхет маҡсатыңа ҡарай хәрәкәт иткәндә татылалыр, тип уйлайым. Маҡсат булмаһа, барыһы ла төҫһеҙләнә. Әйткәндәй, эшләгән, алға хәрәкәт иткән саҡта йәшәп өлгөрөргә лә онотторға ярамай.

**▸ Адвокаттың эше ниҙән ғибәрәт? Ысынында, һеҙ енәйәтсене яҡлайһығыҙ булып сыға түгелме?**

- Адвокат - ул закондарҙы яҡлаусы кеше. Ул үҙе яҡлаған кешегә закон сиктәрендә уны нимә көтөүен аңлата. Адвокатҡа гонорар эшенең һөҙөмтәһе өсөн түгел, ә барлығы өсөн түләнә. Шуға, һөҙөмтә ике кешегә: адвокатҡа һәм ул яҡлаған кешегә бәйле. Ҡайһы берҙә кеше үҙ ғәйебен йәшерергә тырыша. Ә факттар һәм ҡыланыштар - икенсе нәмә тураһында һөйләй. Ундай саҡта ғәйебеңде танымау ниндәй эҙемтәләргә килтереүен аңлатабыҙ. Әгәр һин яҡлаған кеше ысынлап та ғәйепһеҙ икән, уны ҡотҡарыу өсөн аҙаҡҡаса көрәшәһең. Ә кешенең ғәйеплеме-түгелме икәне тәжрибәле адвокатҡа тәү ҡарауҙан уҡ күренә бит ул. Адвокат та енәйәтсенең хөкөмгә тарттырылыуын теләй, әммә уның ҡылған ҡылыҡтары өсөн ҡаралған хөкөм бирелеүе өсөн көрәшә. Адвокат енәйәтселекте яҡламай, ул дөрөҫлөктө һәм законды яҡлай.

**▸ Төп эшегеҙ менән бергә, һеҙҙең иңгә бик күп йәмәғәт эштәре лә һалынған...**

- БР Йәмәғәт палатаһына тиклем, 2011 йылдан алып, мин ике саҡырылыш буйы БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһында әүҙем эшмәкәрлек алып барҙым. Йәштәр йәмәғәт палатаһында эшләгәндә мин бер нисә тапҡыр ғәмәлдәге закондарға үҙгәрештәр индереү тураһындағы закон проектта-

рын төҙөүҙә, алдан уҡыуҙарҙа ҡатнаштым. Йәштәргә бына шулай сәйәсәттә, республиканың йәмәғәт тормошонда үҙ башланғыстарын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге биреүҙе дөрөҫ юл тип һанайым.

Быйылғы йыл менән өсөн үҙемдә йәмәғәт эшмәкәре булараҡ һынап ҡарау йәһәтенән айырыуса әһәмиәтле булды. Май айында республика Йәмәғәт палатаһының 5-се саҡырылышы составына ҡабаттан һайландым. Палатаның бер комиссияһы рәйесе булараҡ, мин ваҡыты-ваҡыты менән республика райондарында урындағы йәмәғәт советтары ултырыштарын ойоштора. Бынан тыш, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлегем менән дәүләт власы органдары уҙғарған төрлө кәңәшмәләрҙә ҡатнашыуҙы ла күҙ уңында тота. Һинең йәмәғәт эшмәкәрлегеңде танып, билдәләп тороуҙарын белеү ҡыуандыра. Мин быны әле юлымдың башы ғына икәнен, алда граждандарҙың һәм халҡымдың тормошон яҡшыртыуға арналған бихисап мөһим социаль реформалар һәм проекттар булырына ла ышанам.

**Йәштәребеҙ менән йыш аралашаһығыҙҙыр, уларға төбәп әйтер һүҙ-кәңәштәрегеҙ ниндәйерәк булыр?**

- Был мәҡәләне оло быуын да уҡыясағын беләм, шуға, иң башта уларға өндәшкем килә. Йәштәр быуындар араһында бәйләнеш булдырыуға, 5 баланан кәм булмаған ныҡлы ғаилә ҡорорға ынтылып торһон өсөн ололар уларҙа ғаилә традицияларына ихтирам тойғоһо тәрбиәләһә ине.

Ә йәш егеттәргә иһә физик тороштарын да, аҡылдарын да, рухтарын да нығытырға кәңәш итер инем. Спорт холокто ла, рухты ла, еңеүгә ынтылышты ла сыныҡтыра. Хәйер, кемдер: "Тышкы күренеш мөһим түгел, иң мөһиме - эске йөкмәтке", - тиһә лә, минеңсә, көҙгөлә күргән һынығыҙ беҙгә ышаныс та өҫтәй, йә булмаһа, комплекстарығыҙҙы тәрәнәйтә. Мәҫәлән, мин 14 йәшемдән төрлө спорт төрҙәре: бокс, ҡул алышы менән шөғөлләндем. Хәҙер ҙә үҙемде "формала" тоторға тырышам. Ирҙәр - локомотив, улар - аҡса табыусы. Шуға ир кеше һәр ваҡыт яңынан-яңы белемдәр алып, уларҙы ғәмәлдә ҡулланып, үҙ ғаиләһенең лайыҡлы йәшәү кимәлен булдырыу юлдарын табып торорға тейеш.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ла әйтер һүҙем бар. Ғаиләләге тәртип ҡатындың фиғеленә бәйле. Йәһүдтәрҙә милләт юкка ғына ҡатын-ҡыҙ линияһы буйынса бирелмәйҙер. Ир ниндәй генә яҡшы булып та, ҡатын насар икән - ул ғаилә барыбер уңа алмай. Ҡыҙҙарыбыҙҙа тоғролоҡ сифаттары ла көслө булырға тейеш. Улар - ғаилә усағын һаҡлаусы. Ирҙе хәстәрләүҙән тыш, үҙенде ҡарауҙы ла оноторға ярамай.

Әйтер һүҙем тағы шул - бизнес менән шөғөлләнергә тейеш заман йәштәре. Ошо урында билдәле бер эшҡыуарҙың әйткәне хәтергә төшә: "То, что я разбогател, связывают с тем, что мой отец давал мне деньги. Да, действительно так! Но я богат не потому, что отец давал мне деньги, а потому, что давал мне нужные советы, благодаря чему я разбогател".

Бизнеста уңышҡа өлгәшеү темаһына яҙылған трактаттар бихисап ул, улар ҡайһы бер мәлдәрҙә бизнес планы төҙөгәндә ярҙам да итеүе бар, ләкин ул һинә әҙ - бизнесты башлағанда, тәүҙә ул бизнестың ерлеген ҡапшап ҡарап, ҡайһы нигеҙҙә тороуынды тойоп алырға кәрәк. Шунһыҙ был эшкә өйрәнеп китеү мөмкин түгел. Бизнесты башлар алдынан белем кәрәк. Ә белемде ҡайҙан алыуың мөһим түгел. Шул уҡ ваҡытта, һәр саҡ бары тик үҙеңә генә таяныу һәм ышаныу мөһим.

**Был өлкә буйынса бик белеп һөйләйһегеҙ, тимәк, һеҙ үҙегеҙ ҙә бизнес менән шөғөлләнеп өлгөргәнһегеҙ буламы?**

- Эйе, мин дә үҙ ваҡытында бизнес менән шөғөлләндем. Үҙемдең эшемде Сибайҙа саҡта уҡ башлағайным. Өфөгә күскәс, уны дауам иттем. Әммә бында йәнә барыһын да яңынан башларға тура килде. Икенсе ҡала, икенсе иҡтисад, икенсе ҡағиҙәләр. Еңел булманы, әлбиттә, шулай ҙа тырышлыҡ, ныҡышмалыҡ арҡаһында йәштәштәрем күңел асҡан ваҡытта мин үҙемә бер нисә яңы автомобиль һатып ала алдым, 2-се курстан алып ғаиләмде үҙем ҡарауым, сит илдәргә сәйәхәттәрем тураһында әйтеп тә тормайым. Студент саҡта бизнес менән ярҙамһыҙ шөғөлләнһәм, бөгөн мин башлаған эште ҡатыным уңышлы ғына дауам итә. Тәжрибәмдән сығып, бизнесты аҙҙан башларға кәрәк, тип һанайым. Ул тәғәмхана булһымы, башҡа нәмәме - барыбер. Бынан тыш, тәүҙә бизнестың системаһын үҙеңә аңлап алырға кәрәк. Үҙеңдең белемеңде һәм тәжрибәңде бизнеста ҡуллана белгән өлкәлә яллаһып эшләп алыу ҙа яҡшы. Бынан тыш, иҡтисадты, уның төҙөлөшөн белергә кәрәк. Конкурентлыҡҡа һәм енелеүҙәргә лә әҙер булыу талап ителә, сөнки, бизнеста йә һин берәйһен йотаһың, йә һине йоталар. Шулай ҙа бизнеста иң мөһиме - идея. Ә идея белем булғанда ғына барлыҡҡа килә торған ҡиммәт. Кешегә уның мейе эшмәкәрлеге килем килтерә. Уй эшмәкәрлеге - үҙе уҡ капитал.

Тағы шуны өҫтәге килә: белемең, тәжрибәң һәм идеяң булһа, үҙ-үҙеңде тормошҡа ашырыуҙан ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Уңышлы бизнес алып барыусының иң мөһим сифттарының береһе - ҡыйыулыҡ ул. Шуға күрә ҙур ҡалала уҡып бөткәс, өйгә ҡайтырға ашыҡмағыҙ, ҙур ҡаланы яуларға тәүәккәлләгеҙ. Башҡорт йәштәрен бизнес өлкәһендә күберәк күргe килә. Улар аҡсаны күпме кәрәк, шул ҡәҙәре эшләһен ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Денис Булат улының атаһы Булат Ғүмәр улы Йомадилов - БР Адвокаттар коллегияһы президенты, БР Дәүләт йыйылышы - Ҡоролтай депутаты икәнлеген дә әйтеп үтергә кәрәктер. Шундай етди, эшенә бирелгән белгес, үҙенә алмаш тәрбиәләй алыуы менән Булат Ғүмәр улы ла маҡтауға, һоҡланыуға лайыҡ, беҙҙеңсә.**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ**
**яҙып алды.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЙҮГЕРЕП ЙӨРӨП... ЙӘШӘРӘ



Вәсилә һәм...



Вилүр Камалетдиновтар.

**Йөҙө ҡояштай балҡый, күҙҙәренән илаһи нур бөркөлгәндәй. Уға 62 йәш тә биреп булмай, йәшлек сәме һәм дәрт-дарманы ташып торған ханымға ҡарап, ирекһеҙҙән, ҡайҙалыр уҡып, хәтерҙә ҡалған ҡанатлы һүҙҙәр тел осонда әйләнә: йәшәүҙең ике формаһы бар - быҫҡыу һәм дөрләп яныу. Һүҙем ана шул тормош күркәмлеген тоя белеп, янып йәшәгән, әүҙемлеге менән үҙен һәм ғаиләһен юғары үрҙәргә әйҙәп-әйҙәгән Вәсилә Камалетдинова хаҡында булыр.**

Күптән түгел ирле-ҡатынлы Камалетдиновтар Эстонияның Таллин ҡалаһында Халыҡ-ара марафонда (20 мең кеше ҡатнашҡан) Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнгән. Вилүр Камалетдинов 63 кеше араһында үҙ йәш категорияһында 2-се урын алып ҡайтҡан. Ошо хаҡтағы тәьҫораттары менән ихлас уртаҡлашты Вәсилә Шәйхетдин ҡыҙы.

-Марафон үткәреләсәге тураһында интернет йә радионан ишетеп ҡалһам, йыйына башлайбыҙ. Эстонияла Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаевтың яңыртылған һәйкәлен барып күрҙек, унда барыр алдынан сәскәләр һатылған магазинға кереп, гөлләмә алдым. Сит ерҙә үҙемдең Башҡортостандан килгәнлекте белдереп, милли геройыбыҙ бюсы ҡуйылған иҫтәлекле урынға башҡорт милли костюмында барыуым ғорурлыҡ хистәрен арттырҙы. Эргәмә эстон ҡатыны килеп: "Һеҙ Башҡортостанданмы?" - тип һораны. Һәм ул һомғол буйлы, нәзәкәтле, иҫ киткес матур кейемле башҡорт ҡыҙҙарының концертын ҡарауы тураһында һөйләне һәм беҙҙең халыҡҡа ҡарата тәрән ихтирамын белдерҙе. Ошондай йыйлы ҡараш йәнде ирете, батырыбыҙ һәйкәленең һәр ваҡыт гөл-сәскәгә күмелеүен һәм бындағы таҙалыҡ, тәртип хаҡында лә еткергәс, бигерәк рәхәт булып китте. Телегеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрегеҙҙе һаҡлағыҙ, тип шул ҡатынҡайҙың әйтеүе бөгөнгө ҡиҫкен проблемаларҙы иҫкә төшөрҙө. Палдискиҙа көнө буйы милли кейемдә йөрөнөм, йәмәғәт транспортында урындағы халыҡ ғәжәп итеп ҡараны, сағыу башҡорт кейеме барыһын да һоҡландырҙы. Бына бит үҙебеҙҙең боронғо кейем хатта сит илдәрҙә йәшәүселәрҙең дә күңел ҡылдарына ҡағылды,- тип сит ерҙә башҡорттар тураһында яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙары тураһында бәйән итте әңгәмәсем.

Рухлы гүзәл заттың тел мәсьәләһенә лә үҙ фекере. Ейән-ейәнсәрҙәрен бишеккә һалғанда һәр ваҡыт башҡорт халҡының оҙон көйҙәре, ҡурай моңдары яҙылған диск ҡуйып йоҡлатыуы - ғәзиздәренең әсә телен бәләкәйҙән ҡанға, йәнгә һеңдереп үҫтереүе, тигән һүҙ бит. Сәләмәт тормош рәүеше, атай-олатайҙар аманатын һаҡлау, әхләҡи-рухи һәм мәҙәни ҡиммәттәр нигеҙендә камиллашыу, гүзәллеккә ынтылыу, әүҙем тормошто һайлау - Камалетдиновтар ғаиләһенең булмышында.

Вилүр Мәсәлим улы марафондарҙа йүгереп, барлығы 14 миҙалға лайыҡ булһа, мәкәләм геройы 11-гә өлгәшкән. Ә йүгерә башлағандарына ни бары икенсе йыл. Ошо осорҙа ҡайҙа ғына булырға тура килмәгән уларға: Яр Салдыла (1-се урын), Әлмәттә (2-се), Өфөләге Халыҡ-ара марафонда (1-се), Хельсинкиҙа ла (7-се ) һынатмағандар.

- Шулай ҙа иң ҡәҙерле миҙал-"Йәшәү юлы"- ныҡы, - ти Вәсилә Шәйхетдин ҡыҙы. -Быйыл ғинуарҙа Санкт-Петербургта уҙғарылған 48-се Халыҡ-ара ҡышҡы марафонда 21 саҡрымды 2 сәғәт 55 минутта үттем. Ул иң ауыры булды, сөнки тауға ҡарай үргә йүгерергә кәрәк ине. Урман марафонында 21 километр үтеп, ағастан матур итеп һырлап яһалған миҙал алдыҡ. 23 майҙа Мәскәү марафонында мин - 5 саҡрымға, Вилүр 21,1 саҡрымға йүгерҙе. Стәрлетамаҡта 27 майҙа 10 километр араны үтеп, 3-сө килдем. 17 сентябрҙә Өфөлә Халыҡ-ара марафонда 1-се баҫҡысҡа күтәрелдем. Спорт кейемен тиҙ генә милли костюмыма алыштырҙым. Башҡорт кулдәге шунда уҡ кешенең иғтибарын йәлеп итә. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров килеп ҡотланы, уңыштар теләне...

Вәсилә Шәйхетдин ҡыҙы ҡул эштәренә лә маһир. Туҡыу станогы йыйып, шартына килтереп, балаҫ та һуғып алған, ә инде ҡашмау, селтәрҙәре хайран итә. Уның инде үҙе бер айырым тема. Йәш сырайлы булыуҙың серҙәрен дә асып һалды ул: "Хәрәкәттә - бәрәкәт", тип юкка әйтмәгән халҡыбыҙ. Йүгереү беҙҙе йәшәртә, йәшәтә, кәйеф һәр саҡ күтәренке. Күңелдә көнсөллөк, асыу, кенә һаҡлау тойғоһо юҡ. Йәшәүҙән йәм таба белеү һәр бер кешенең үҙенән тора, тик вайымһыҙлыҡтан арыныырға кәрәктер. Балалар, туғандар менән аралашып, яңы дуҫтар, таныштар табып, ғүмеребеҙҙе заяға үткәрмәй кинәнеп йәшәйбеҙ".

Ә яҡын-ара көндәрҙәге пландарға килгәндә, Вилүр Мәсәлим улы Дүртөйләләге ярыммарафонға, ә үҙе Ҡаҙанда октябрҙең 8-ендә үтәсәк марафонға әҙерләнә. Яҡшы өлгәгә эйәреүселәр ҙә бар. Ҡоҙағыйы Алһыу Илгиз ҡыҙы Баймаҡта призлы урын алғас, дәртләнеп киткән һәм улар менән бергә йүгерергә йыйына. Камалетдиновтар ғаиләһенең донъяның төрлө урындарын барып күреүе, сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыуы, сәйәхәт дарманы башҡаларҙы ла сәмләндермәй, иғтибар иттермәй ҡалмаҫ, моғайын. Шуға ышана улар үҙҙәре лә.

**Миләүшә БӘШИРОВА.**
**Архангел районы.**

***✓ Бөгөн аҡыллыларҙы һантыйға иҫәпләр заман килде шул. Донъяла кешеләргә йәшәр өсөн ышыҡ урын ҡалмай бара, уны аҡса, байлыҡ ҡыҫырыҡлай. Аҡса хакимлыҡ иткән ерҙән ғәҙеллек, хаҡиҡәт, бер-береңә булған әҙәмсә мөнәсәбәт ҡаса…***




Дилемма көтөлмәгән тәҡдимгә шаңҡып ҡалды, яңылыш ишетмәнемме, тигәндәй, иргә аптырап текәлде. Теге ни, иҫе лә китмәй, уны ашарҙай булып яуап көтөп, ташбыҡ күҙҙәрен секрәйтеп һөҙөп ҡарай. Нимә тип яуап бирергә? Баш тартһа, эшһеҙ урамда тороп ҡала, ризалашыр ине, үҙ балаһынан баш тартып, бында кил дә эт фиғелләнеп йән аҫыра инде. Ул көсөктәрҙе түгел, үҙ сабыйын имеҙеп ҡарағаны юҡ. Ниндәйерәк тойғо кисерә икән бала имеҙгән әсә? Теге саҡ, балалар табыу йортонда йәнәш карауатта ауылдан килгән ҡатын ятты. Уның сабыйын ҡабул итергә теләмәүен ишеткәс, әрләмәне лә, өгөтләмәне лә, әммә үҙ алдына һөйләнгәндәй әйтеп ҡуйғайны: "Күкрәк һөтө аша сабый әсәһе менән бәйләнешкә инә. Был Йыһан кимәлендәге илаһи бәйләнеш. Уны өҙһәң, һуңынан ауыр буласаҡ һеңлем, шуны онотма..." Был бәйләнеш уға нимә алып килер? Уның бала имеҙгән әсәне һүрәтләгән картиналарҙы күргәне бар. Ниндәйҙер йылылыҡ, яҡтылыҡ бөркөлә һымаҡ уларҙан. Әсәнең йөҙө эске кисерештәрҙән нурланған, унан эске наҙ, ҡот бөркөлә төҫлө. Шул картиналар эргәһенән китә алмай торғаны бар. Ә бына ул үҙ балаһынан баш тартты, хатта күрергә лә теләмәне. Юҡ, күргеһе килде уның, бик килде, тик үҙен еңер көс тапты. Күрһә, яҡынлатһа, ары баш тарта алмаҫмын, тип ҡурҡты. Ә бит балаһы мөхәббәттән яралмағайны, ул бары алданыу, хаталаныу емеше ине... Хәҙер килеп, имсәктәренә эт мороно ҡағылырмы? Ҡырағай, башҡа һыймаҫлыҡ, мөмкин булмаҫлыҡ хәл. Ни ҡылырға?

- Йә, әйт һүҙеңде! Теләмәйһең икән, сараһыҙламайым. Яуабыңды иртәгә иртән бирә алаһың. Тик көсөктәр ас, оҙаҡ көтә алмайым. Тағы, эш эҙләүселәр эт тубығынан, һин баш тартһаң, икенселәр бар. Мең евро урамда ятмай. Теләүсе табылыр.

"Әгәр иртәгә тиклем ҡалдырһам, берәйһе килеп ҡуйһа? Был теге ҡурсаҡ ҡатын ише һайланып тормаясаҡ, көсөктәргә ниндәй һөт булһа ла барыбер. Мине бында кем күрә лә, кем белә. Ваҡытлыса, бер аҙ аҡса эшләгәнсе, йүнле урын тапҡансы ғына ҡалып торормон да, китермен..."

- Риза... - Язаға хөкөм ителеп, яҙмышына күнгән бисара тотҡондай, шулай тине лә башын эйҙе.

- Килештек! Хәҙер торлағыңа инәйек, беренсе имеҙгәнеңде ҡарап инанырға тейешмен, көсөктәр һине ҡабул итерҙәрме, әллә юҡмы.

- Мин үҙем. Зинһар... - Түштәрен тәү осраған ир алдында яланғасландырыуын күҙ алдына килтергән Дилемма, иҫен йыйып өлгөрөп, сәбәләнеп, ҡулдарын болғаны. - Нисек тә ҡабул итерҙәр. Өйрәтермен...

- Әйҙә-әйҙә, атла, һин ялланғанһың, мин аҡса түләп яллағанмын. Бесәй-сысҡан уйнамайыҡ. Бөтәһен дә үҙ күҙҙәрем менән күрергә тейешмен.

Тамаҡ төбө менән әйтелгән һүҙҙәргә буйһондо Дилемма, буйһонмай ни генә ҡылһын инде...

Инделәр. Бүлмә тар ғына: карауат, ишек төбөндәге һыуытҡыс, түр яҡтағы бәләкәй телевизор, өҫтәл, ике ултырғыс саҡ һыйған. Бүлмәгә тын алғыһыҙ булып эт еҫе тулған.

Улар инеү менән карауат аҫтынан аҡһыл һоро йомарсыҡтар тәгәрәшеп килеп сыҡтылар ҙа, ирҙең аяҡтарына һырылып, балаҡтарын төрткөләргә тотондолар.

- Нишләй, йәнкиҫәктәр! Асыҡтығыҙмы? Хәҙер туйғансы һыйланырһығыҙ, һеҙҙе ҡайғыртып имеҙеүсе ялланым. - Иҙән уртаһында аяҡтарын кирә баҫып, бөйөрҙәренә таянған ир Дилеммаға хужаларса күрһәтмәһен бирҙе. - Блузкаңды сис тә ултырғысҡа ултыр... Ҡайһы ҡатындың бюстгальтер аша имеҙгәнен күргәнең бар... Уны ла һал!

Дилемма кейемдәренән ҡотолдо ла ҡулдары менән түштәрен йәшереп боҫормаланы.

Ымһындырғыс нәфис, һөттәргә тулышҡанлыҡтан тығыҙ булып өҫ яҡҡа ҡарай тырпайған имсәктәрҙе күргән ирҙең күҙҙәрендә ҡырағай осҡондар бейене, ул һалпыш ирендәрен сәпелдәтеп тамшанды, мауыҡтырғыс күренештән арына алмай ыуаланып, урынында тапанды. Хатта ҡайһылыр мәлдә яңы һауған һөт еҫен тойомлап, сабырлығын юғалтҡан быҙау ише танауын юғарыға сөйөп еҫкәнгәндәй ҙә итте. Ниһайәт, теләр-теләмәҫ кенә ысынбарлыҡҡа ҡайтып, хәлһеҙ шыбырҙаны:

- Хәҙер ике ҡулыңа ике көсөктө ал да түшеңә терә... Бына шулай... Төшөнмәнеләр шикелле, ҡана, бир әле. - Ул сыйылдатып көсөктәрҙең берәүһен алып, ауыҙын шаҡарҙы ла, Дилемманың имсәк осон ыржайған тешле талымһыҙ ауыҙға тыҡты. - Ҡара, имә ләбаһа, имеү генә түгел, рәхәтләнә, кинәнә... - Ир тамашаны аҙағынаса күрергә теләп, ултырғыс тартып, Дилемманың алдына сүкте. Бер аҙҙан оло кинәнес менән икенсе имсәкте остай һалып, сираттағы көсөккә ҡаптырҙы.

Ас көсөктәр талпандай ҡаҙалып, уның имсәктәрен генә түгел, йәнен, көсөн, ҡарыуын, йәненең төбөндә йәшеренеп ҡалған кешелек сифаттарын да һуралар төҫлө. Бына икәүһен имеҙҙе, уларҙы сираттағылары алыштырҙы. Былары тағы ла бәйелһеҙерәк ҡыланалар. Уны ҡапыл үҙе лә аңлата алмаҫлыҡ хайуани хис биләне, әйтерһең дә, эттәрҙең булмышы тәненә күсә бара, күсә бара, күсеү генә түгел, ҡатын-ҡыҙ булмышы кәнтәй эт тойғоһо менән аяуһыҙ ҡыҫырыҡлана... Ул ырылдауға тартым ыңҡылдауын эскә йотоп, башын эйҙе, сикәләрен ҡайнар күҙ йәштәре бешерҙе.

* * *

Дилемманың көсөктәр имеҙеүҙән тыш көндәлек бурыстары артыҡ ҡатмарлы түгел, былай ҙа ялтлап торған коттедж бүлмәләрен тәртипкә килтерә, икенсе ҡаттағы бәләкәй бүлмәлә тар карауатта һенағастай ҡатып ятҡан ҡарсыҡтың эске күлдәген, түшәген ике көнгә бер алмаштыра. Ҡалған ваҡытыңды теләһә нимә эшлә, бер кем һине борсомай, тик бер генә шарт - өйҙә хужаның рөхсәтенән тыш ҡалдырырға тейеш түгелһең, сөнки көсөктәр теләһә ҡайһы ваҡыт имсәк таптырыуҙары ихтимал. Иң ауыр, йәненә тейгән, язаға тиң шөғөл - шул асмәйелдәрҙе имеҙеү. Хужаның килеп инеп тартыныуһыҙ күҙәтеүе бигерәк түбәнһетә. Шул мәлдә Дилемма үҙен ошо көсөктәрҙе тыуҙырған кәнтәй хәлендә тоя. Ҡайтып ҡына китер ине, ул бында ҡул аяғы менән бәйле, йәшәр, тамаҡлыҡ аҡса эшләр урыны ошо. Урамда тороп ҡала алмай бит. Тағы шул саҡлы аҡсаны уға кем тотторһон? Теге алғаның ҡап яртыһын бер нисә көн үткәс почта аша оләсәһенә һалды, мәгәр, шатлыҡ, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисермәне. Аҡсаларҙан эт еҫе килгән һымаҡ тойолдо уға.

Хужаның улы ҡайтып күренгәне юҡ әлегә, ә бына йәш ҡатын, күңеленән уны актриса, тип атаны, теге бәйнәт ҡарсыҡ Дилемманы шыпа тиңһенмәйҙәр һымаҡ, түбәнһетеп ҡарайҙар төҫлө. Актриса күп ваҡыт уны күрмәмеш булып ҡылана, ә бына ҡарсыҡ тәү баштан ҡырыҫ, уҫал мөғәмәләлә. Актрисаның һауаланыуын аңларға мөмкин, сөнки телевизорҙан уны бик йыш күрһәтәләр, даны бар, бик популяр. Ҡарсыҡ кем һуң: йоҡа, таралып барған һалам сәсле, ҡаҡлаған, кипкән тәнле, үлек йөҙлө бер шәүлә, ҡарасҡы инде шунда. Бары мөсһөҙ тәнендә йән барлығын раҫлап күҙҙәре генә тере ҡуҙҙай көйрәп яналар. Тәүге көндәрҙә өҫтөн, түшәкте алыштырғанда ауыртыуҙан йөҙөн ғазаплы сирһа ла зарланыу өнөн сығармаңы. Әллә телдән ҡалғанмы был, тигән уйы нығынып та өлгөрмәне, ике аҙна тигәндә был ап-асыҡ итеп һораны, "Һин ҡайҙан?" Яуапты ишеткәс әсе ҡапҡандай йоҡа иренле ауыҙын бөрөштөрҙө: "Ер аяғы, ер башынан килгәнһең икән. Нимәңде юғалттың бында?" Сәйер, нисәнсе көн уны баға, ә ул мәғәнәһеҙ һорауын бирә. Хужа хаҡлылыр, был ысынлап та склероз, ҡартлыҡ маразмы менән яфаланалыр. Тағы ла бер аҙнанан ҡарсыҡтың аҡылының теүәллегенә инанды, тумбочка өҫтөнә емеш һутын ҡуйып сығырға ғына йыйынғайны, итәғәтле тауыш туҡтатты:

- Ултыр әле, балам? - Үҙ итеп, яҡын итеп әйтте

Уға оләсәһе шулай яратып өндәшә ине. Көтөлмәгән тәҡдимде нисек ҡабул итергә лә белмәй аптыранып тора ине үтенес ҡабатланды:

- Көсөктәрҙе имеҙергә өлгөрөрһөң, бер аҙ янымда булып, яңғыҙлығымдан арындырып сыҡ. - Тимәк, ҡарсыҡ уның икенсе шөғөлө хаҡында ла хәбәрҙар.

Дилемма әйткәнде һүҙһеҙ үтәне.

- Аҡылдан яҙған әбей, уның бытылдауын тыңлама, тигәндәрҙер инде һиңә минең хаҡта, шулаймы? Әйтмәһәң дә беләм, шулай тигәндәр. Бөгөн аҡыллыларҙы һантыйға иҫәпләр заман килде шул. Донъяла кешеләргә йәшәр өсөн ышыҡ урын ҡалмай бара, уны аҡса, байлыҡ ҡыҫырыҡлай. Аҡса хаҡимлыҡ иткән ерҙән ғәҙеллек, хаҡиҡәт, бер-береңә булған әҙәмсә мөнәсәбәт ҡаса... Мин элек уҡытыусы инем.

- Мин дә уҡытыусы. Институт бөтөрҙөм.

- Уҡытыусы, тиһеңме? Ышанғым килмәй! Һине кем уҡытҡандыр ҙа, унан ниндәй һабаҡ алып сыҡҡанһыңдыр. Ғәжәп... Хәйер, кешенең эт хәлендә йәшәүенә ул ғына ғәйепле түгел, уны ураҡан мөхит, йәмғиәт ғәйепле. Ә хәҙергә сыҡ, мин арыным...

- Бәлки, һеҙгә берәй нәмә кәрәктер?

- Кәрәкмәй. Бер кемде лә күргем, бер кем менән дә аралашҡым килмәй, бары шул ғына. - Шунан ҡысҡырып әйтелмәгән, күңеленә тынғылыҡ бирмәгән уйын асыҡтан-асыҡ йомғаҡланы булыр - Иң ауыр, дауалап булмаҫлыҡ сир - тәнһәләү һәм яңғыҙлыҡ, тип атала. Бар сыҡ!

Иртән көсөктәрҙе имеҙҙе лә төп өйҙө йыйыштырырға, тип ишек алдына сыҡҡайны һуҡмаҡта арҡыры ятҡан Белканы тап итте. Эт ҡымшанмай ҙа, күмерҙәй ҡара күҙҙәрен баҙлатып уға төбәлгән. Яҡынлағас, өнһөҙ генә осло аҙау тештәрен ыржайтып күрһәтте. Дилемма ҡурҡып артҡа сигенде, ярҙам өмөт итеп ян-яғына ҡаранды һәм беседканан алыҫ түгел ошо хәлде ҡыҙыҡһынып күҙәткән хеҙмәтсене күрҙе. Ул да һөжүм итергә йыйынып уҡталған бүрҙайға оҡшаған. Бына был икәү дәррәү ташланырҙар ҙа уны өҙгөсләп, йолҡҡослап ырғытырҙар. Бер аҙҙан хеҙмәтсе битлек йөҙөн тартыштырып үсле йылмайғандай итте лә кәүҙәһенә тап килмәгән нәҙек тауыш менән киҫәтте: "Бынан ары эттән берүк йырағыраҡ йөрөргә тырыш, ни тиһәң дә ул һинең көндәшең, шуға аңғармаҫтан ҡонон ҡайтарыуы бар, көсөктәрҙе имеҙеүеңде күрмәһә лә тәнеңдән уларҙың еҫен тойомлайҙыр..." Дилемма аҫҡы ирендәрен ауырттырғансы тешләне, әммә бер һүҙ ҙә өндәшмәне.

Кис еткәс, бүлмәһенә бикләнде лә тәҙрә ҡорғанын тартҡандан һуң сисенеп ташлап ҙур көритәгә алдан әҙерләп ҡуйған йылымыс һыуҙа йыуынды, тәнен ауырттырғансы һабынлы йыуғыс менән ышҡыны. Йыуынып бөткәс ентекләп тикшерергә кереште - беләктәрен, яурынбаштарын, кейгән кейемдәрен берәмтеләп еҫкәп сыҡты. Ят еҫте тапманы. Хәйер, бында тәү тапҡыр ингәнендә эт еҫе танауын ярып алып бара ине, хәҙер уны тоймай ҙа, тимәк, әҙәм балаһы эшләгән эшенә генә түгел, эргә-тирәһендәге еҫкә лә күнегә бара... Теге ҡарсыҡ менән актриса, бәлки, шуның өсөн уны яҡынлатмайҙарҙыр? Дилемма инәнән тыума яланғас көйө башта диванға бөршәйеп ултырҙы, шунан хәлһеҙләнгәндәй иҙәнгә шыуып төштө. Шуны ғына көткән көсөктәр карауат аҫтынан тумарлап килеп сыҡтылар ҙа янында уралғылай башланылар, еүеш морондары менән тәненә ҡағылалар, аяҡтарына үрмәләп менеп түштәренә үреләләр хатта. Йөрәген әрнеүле уй ярҙы: "Ысын кәнтәйгә әүерелдем, ниһайәт..."

Һуңғы осорҙа көнитмеше бер аҙ яйға һалынды һымаҡ, сөнки уны кәрәккән-кәрәкмәгәндә борсоусы юҡ, хужа аҙна самаһы айыҡмайынса эсә. Бүлмәһенә бикләнгән дә ихатаға сығып та әйләнмәй. Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа күҙгә салынған мәлдәрҙә лә танырлыҡ түгел үҙен: сәстәр сыбыҡланып ялбыраған, быжыр йөҙ, итләс танау шешенгән, былай ҙа ҡыҙғылт, ҡан һауған күҙҙәр донъяға аҡылдан яҙған кешеләй мәғәнәһеҙ ҡарайҙар. Иҫерткес эсемлектәрҙе уға хеҙмәтсеһе ташый. Тәүге осорҙа ул һирәк йөрөй ине магазинға, хәҙер йүгермәләүе йышайғандан-йышая, хатта ҡайһы ваҡыт машинаһын тоҡандырып төн уртаһында сығып китә. Өйәнәге көрс-өккә терәлә бара, тимәк.

**(Дауамы бар).**

***✓ Бөгөн төрлө кимәл, бигерәк тә район, ауыл депутаттары, ауыл биләмәләре башлыҡтары үҙ иңдәренә халыҡ менән фиҙаҡәр эшләү яуаплылығын алһа, беҙ ыңғай үҙгәрештәргә йөҙ тотор инек.***



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# ИКЕ УТ АРАҺЫНДА...

## шик-шөбһә, күләгә юҡ, бар нәмә аңлайышлы, ябай



**Был көндәрҙә танылған шағирә, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Йомабикә Сәләхетдин ҡыҙы ИЛЬЯСОВА үҙенең күркәм юбилейын билдәләй. Ошо уңайҙан уға өс һорау бирҙек.**

**➔ Ниндәй ул шағирә булмышы?**

- "Аҡҡош" тигән шиғырымда шағирә булмышына ошондай һығымта яһағандаймын:

*Аҡҡош ниндәй гүзәл осҡан саҡта,*
*Һоҡланырлыҡ күлдә йөҙгәндә.*
*Ярға сығып, аяҡ баҫыу менән,*
*Матурлыҡтан улар өҙөлә.*
*Йорт ҡаҙылай, ябай йорт ҡаҙылай*
*Хәрәкәте ерҙә аҡҡоштоң.*
*Эй, шағирә, донъя көткән саҡта*
*Һин дә шул бисара аҡҡошһоң.*

Шуның һымаҡ, шағирәлек гел генә яҡты, ҡанатлы тойғолар уятмай. Уға тетрәнеү, һыҙланыу ҙа хас.

Минең аңымдағы Алла - ул ғаләм аҡылы. Ошо аҡылдың хискә бәйле өлөшө Ерҙә, кешеләр араһында, шиғриәт аша, юғары кимәлдәге һүҙ аша үҫешә. Тимәк, шағир ниндәйҙер дәрәжәлә донъяны төҙөкләндереү эшен алып бара. Әммә ул үҙе, һәр әҙәм балаһы кеүек үк, йомшаҡлыҡтарҙан, етешһеҙлектәрҙән азат түгел. Ижадында булмышындағы иң илаһи, төп асылы менән асыла, шуның менән шиғриәт юғары һәм уҡыусы күңеленә лә ҡанатланыу бирер ҡөҙрәткә эйә.

"Кем мин? Мин ни ҡыйраттым? Бары тик күргәнемде, ишеткәнемде, күҙәткәнемде файҙаландым. Әҫәрҙәремдең сығанағы меңәрләгән кешенән килә: уларҙың берәүҙәре зирәк, икенселәре шыр тиле. Бала сағым, өлгөрөү мәлем, ҡартлығым - ғүмеремдең һәр миҙгеле үҙ инаныуы, үҙ өмөтө, үҙ һәләте менән килде. Мин, асылда, бүтәндәр сәскән уңышты йыйҙым", - тигән Гете. Бүтәндәр сәскән уңышты нисегерәк йыяһың бит әле - ижадта төп талап ошо. Әгәр яҙғы көндә сағыу йәшеллекте генә күрәһең икән, моғайын, шиғыр яҙыу кәрәкмәйҙер, быныһы ғына һәр кемдең күҙенә салына. Ябай ғына күренештә лә фәлсәфә йә образ тойоу мөһим.

Ерҙең тартыу көсө Ньютонға ҡәҙәр ҙә булған. Барҙың серен генә асҡан ул. Шағирҙар ҙа шулай. Һәр ижадсы өсөн донъя яңынан ярала. Минең бер шиғырым тап ошо уй менән башлана:

*Донъя миңә яңы яраламы,*
*Түңкәрелеп, ҡупҡанмы ҡиәмәт,*
*Селпәрәмә килә табынғаным,*
*Ни ҡәҙерле миңә, нимә ҡиммәт?*

Һин донъяны үҙеңә нисек асаһың, үҙең генә нисек ғәжәпләнәһең, тетрәнәһең - шулай яҙаһың. Һәм бына һинең ошо тетрәнеүең тағы ла кемдәрҙәндер күңеленә ауаздаш булһа, улар һинең уҡыусыңа әйләнә.

Шағирҙар күп. Йәшәү асылы бер. Бөтөнләй әйтелмәгән һүҙ, бәлки, юҡтыр ҙа. Ҡайһы саҡ мин үҙем, бары тик үҙем генә йәшәй-йәшәй, уйлай-уйлай килгән фекеремде уҙған быуаттарҙа яҙылған бер әҫәрҙә осратам. Ҡыйын була. Сөнки һәр табыш буш урында тыумай, уның нигеҙендә һинең көсөргәнешле күңел хеҙмәтең һәм зиһен эшмәкәрлегең ята. Бәлки, даһиҙар ғына үҙ һуҡмағын яра алалыр. Талантлы йәки ябай шағирҙарҙың һуҡмаҡтары ҡушылып, буталып бөтәләр. Һыуҙа ла бит эҙ ҡалмай, эҙ ҡалыу түгел, һыуҙың булыуы мөһим. Бәлки, шиғриәт тә шулайҙыр.

Ысын шиғриәттә ваҡыт - үтә күренмәле генә сик. Шекспирҙың ҡайһы сонеттары әле ултырып яҙылған кеүек. Классик музыка, халыҡ көйҙәре шулай быуаттан быуатҡа күсә. Бындай әҫәрҙәрҙең тыуыуы иҡтисадҡа ла, сәйәсәткә лә, муллыҡҡа ла, ғүмер һәм йыл миҙгелдәренә лә, хатта әҙәбиәткә ҡағылышлы талаптарыбыҙға ла бәйле түгел, минеңсә.

Ниндәйҙер халыҡты белгең килһә, уның шиғриәтен уҡырға кәрәктер, тип иҫәпләйем. Сөнки сәсмә әҫәр дөйөмләштеүгә ҡорола, ул тулыһынса авторҙың сағылышы түгел барыбер, драматургияның - үҙ ҡанундары. Ә бына ысын шиғыр (яһалма шиғриәт күҙ уңында тотолмай) йөрәктән түгелеүе менән милләттең төп булмышын һынландыра, тип уйлайым. Шуға күрә, шиғыр һәр заманда ла, бәндәнең күңел кисерештәре кеүек үк, һис бер өҙөлмәүсе сикһеҙлек булып ҡаласаҡ.

**➔ Ә бына дәүләт эшмәкәре булыу һеҙҙең өсөн ниндәй мәғәнәгә эйә? Ул һеҙҙең шағирәлеккә ҡамасауламаймы? Үҙегеҙҙе ике ут араһында итеп тоймайһығыҙмы?**

- Мин шиғыр яҙып ҡына йәшәр инем. Үкенескә ҡаршы, беҙ әҙәбиәткә килгән совет дәүерендә лә үҙенде ижадта раҫлап, китаптарыңдың гонорарына кинәнгәнсе эшләп ашарға кәрәк булды. Унан үҙгәртеп ҡороуҙар осоро башланды, илебеҙ баҙар мөнәсәбәттәренә сумды. Беҙ күңел фажиғәләрендә ҡаңғырған арала дәүләт мөлкәтен йылдам ғына үҙләштереүселәр табылды. Хәҙер инде хөкөм ҡылып маташыу файҙаһыҙ. Шуны ғына әйтергә теләйем: ошо ҡатмарлы мәлдәрҙә башҡорт матбуғаты ғәжәйеп бер яңырыу юлына аяҡ баҫты, улай ғына ла түгел, халыҡ менән бер бөтөнгә әйләнде. Өрьяңы баҫмалар барлыҡҡа килде. Мин дә моңһоу һәм шаҡ ҡатырлыҡ заманға әрнегән йөрәгемде тынысландырыу әмәлен "Йәшлек" гәзитендә таптым. Унан - "Башҡортостан" ға күстем, "Башҡортостан ҡыҙы" на.

Депутат булырмын, мөһим дәүләт эштәре менән шөғөлләнермен, тип һис бер ынтылманым, уйламаным да. Уҡыусылар тарафынан журналисҡа, бигерәк тә баш мөхәрриргә ҡуйылған талаптар яҙмышымды көтөлмәгән һуҡмаҡҡа алып сыҡты. Уның мәғәнәһе шуға ла тәүҙән үк кешеләргә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙға, ғаиләгә ярҙам күрһәтеү тип билдәләнде. Үҙем түгел, мине йәмәғәтселек эшмәкәрлегенә этәргән шарттар ошо бурысты ҡуйҙы. Был маҡсат шағирәнең тынғыһыҙ йәненә һис ҡамасауламай, киреһенсә, уны бушҡа өҙгөләнеүҙән һаҡлай, бар мөмкинлектәргә таянып, ыңғай һөҙөмтәгә ирешергә әйҙәй.

Ике ут араһы ике яҡлап йылыта, яҡтырта. Ике ут араһында шик-шөбһә, күләгә юҡ, бар нәмә ап-асыҡ, аңлайышлы, ябай. Ике ут араһында, әлбиттә, һаҡлыҡ та, тигеҙлек нисбәте лә мөһим. Быныһы - үҙе бер тормош дәресе.

**➔ Һеҙ шағирә, журналист булараҡ та, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ та халыҡ араһында, сәйәси солғанышта. Ошо хәл-торошоғоҙ һеҙҙә ниндәй уйҙар, маҡсаттар, киләсәккә күҙаллауҙар уята? Ғөмүмән, Башҡортостаныбыҙҙың, халҡыбыҙҙың киләсәге өмөтлө булһын өсөн, һеҙҙең ҡарашҡа, ниндәй эштәр атҡарырға кәрәк? Ошо маҡсатыбыҙ юлында бөгөн ниндәй кәртәләр күрәһегеҙ?**

- Ысындан да, һайлаусыларым һәм, ғөмүмән, халыҡ араһында йыш булам. Журналист сағымда кешеләр яҡты яҡтан ғына асылһа, депутаттан улар йәнен өҙгөләгән мәсьәләләрҙе йәшермәй, дәғүә лә белдерә, асыуын да күрһәтә. Шуға ла халыҡты бар асылында беләм, тип әйтә алам.

Ошо күҙәтеүҙәремдән тыуған ҡарашым: бөгөн халыҡ үҙе йәшәгән төбәк (ҡала, район, ауыл) өсөн көнүҙәк эштәрҙе иңенә алырға әҙер, тик ул әйҙәүсегә, ойоштороусыға мохтаж. Сөнки һәр эшмәкәрлек, уның даимилыҡ, көстө дөрөҫ туплап, һөҙөмтәгә йүнәлтеү һымаҡ яҡтарына иғтибар бүлмәһәң, тәғәйенләнешен юғалта. Төрлө кимәл, бигерәк тә район, ауыл депутаттары, ауыл биләмәләре башлыҡтары үҙ иңдәренә халыҡ менән фиҙаҡәр эшләү яуаплылығын алһа, беҙ ыңғай үҙгәрештәргә йөҙ тотор инек, тип уйлайым. Проблемалар беҙҙе халыҡтан айырмаһын, ә, киреһенсә, берләштерһен.

Рәсәй Президенты В.В. Путин да гражданлыҡ йәмғиәте тураһында юҡҡа ғына ҡат-ҡат иҫебеҙгә төшөрмәй. Демократия үҙебеҙ теләгән юҫыҡта хәрәкәтләнеүгә юл аса. Үҙебеҙ теләгән юҫыҡтың дөйөм мәнфәғәттә булыуы уғата фарыз. Өмә ойоштороп, шишмә, урмандарҙы таҙартыу, ауылдарыбыҙҙы матурлау, мәҙәниәт йорттары, китапханаларҙың буш тормай, рухиәт, гүзәллек урынына әүерелеүе, эскелекте, социаль етемлекте иҫкәртеү, кәметеү кеүек бихисап һәм ғәҙәти генә алымдар ғәзиз төйәгебеҙҙе һаҡлауға, ҡурсалауға, күркәмләүгә, моғайын, үҙ өлөшөн индерер ине.

"Ғаиләһе ныҡтың биле ныҡ", ти халҡыбыҙ мәҡәле. Ғаиләһе ныҡтың иле лә ныҡ бит ул. Дәүләтебеҙҙең һәр шәхесе ғаиләлә тәрбиә ала. Ата-әсә яуаплылығы тигән төшөнсә бөгөн иң юғары рәсми даирәләр өсөн - көнүҙәк мәсьәлә. Хөкүмәт ҡаҙнаһының ҡәҙерле өлөшөн ата-әсәһе иҫән көйө ҡараусыһыҙ ҡалған балаларҙы үҙенә алыусыларға тәғәйен сығымдарға, унан инде ошо сараһыҙ етемдәрҙе фатир менән тәьмин итеүгә бүләбеҙ. Был ҡара бушлыҡ киңәйгәндән-киңәйә. Уны ҡаплау ысулы үҫмерҙәр, йәштәр менән уртаҡ тел табыу, уларҙы матур итеп өйләнеп, булдыҡлы атай, мәрхәмәтле әсәй булыуҙан да изге ғәмәл юҡлығына инандырыу. Ошоға бәйле саралар уҙғарыу. Һәм, әлбиттә, бәндәне боғаҙынын алып бахыр иткән араҡы тигән йыланды ауыҙлыҡлау буйынса көрәш һәр беребеҙҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаһын ине. Беҙ бәләкәй саҡта төрлө ойошмаларға, хеҙмәт урындарына агитаторҙар ебәрелә торғайны. Ҡасандыр уларға йөкмәтелгән бурысты бөгөн депутаттар, район, ҡала хакимиәттәре эргәһендәге йәмәғәтселек, йәштәр советтары ағзалары үҙенә күсерә ала.

Халҡыбыҙ һәр саҡ иманын ҡәҙерләп һаҡлаған, дәһшәтле, шаҡ ҡатырғыс әллә нисәмә дәүер аша эскерһеҙлеген, тәбиғилеген, яҡшыға ышанысын юғалтмай үткән. Бөгөнгө ябай ғына түгел заманда ла ғәжәйеп күркәм сифаттары менән һоҡландыра. Шуға ла ул үҙен яратыуҙың һүҙҙә генә ҡалыуын ҡабул итмәй. Ул һис ҡасан булмағанса эшлекле яратыуға мохтаж. Әгәр һин уҡытыусы икән, шундай төплө белем бир: сығарылыш синыфының Берҙәм дәүләт имтихандарын шәп итеп тапшырыуы мәктәпте, ә, тимәк, ауылдың киләсәген яҡлауҙың төп нигеҙенә әйләнһен. Уҡытыу сифатын яҡшыртырлыҡ шарттар, юғары кимәлдәге уҡытыусылар юғыраҡ икән, мөмкин бит тәжрибә хужалығы ойоштороп, районға өлгөлө майҙансыҡҡа әйләнергә, ошо ысул менән мәктәптең һүнеүенә, бәлки, ябылыуына юл ҡуймаҫҡа.

Әгәр һин ауыл биләмәһе башлығы икән, халҡыңа яратыуыңды үҙеңә тапшырылған күләмдә иҫбатла. Юғиһә, мәктәп ихатаһынан сүпте сығарыу үтенесе менән республика парламенты депутатына мөрәжәғәт итәләр.

Башҡортостаныбыҙҙың, халҡыбыҙҙың киләсәге - бөгөнгө көндә, өмөтөбөҙҙөң төплө, ҡөҙрәтле генә түгел, ысынбарлыҡҡа нигеҙләнгән асылында. Хәҡиҡәткә таянып, таш аҫтынан да балҡып килеп сыҡҡан гөл була белеүҙә. Үҫеш юлыбыҙҙы кәртәләр ҡороуға исрафламай, бөйөклөккә һәм бейеклеккә йүнәлтәйек. Ә инде әлегәсә яңылышлыҡ менән ҡоролған кәртәләрҙе лә йә нығытырға, йә алып ташларға мөмкин. Һайлау хоҡуғы - үҙебеҙҙә.

✓ *Күбек майы шуныһы менән ҡиммәт: унда холестерин бөтөнләй юҡ. Шундай бер ысулды һеҙгә лә өйрәтә алам: 500 грамм ауыл ҡаймағына айыртылған ауыл һөтөнән 2 литр ойотҡо һалаһың да, май яҙылғансы бешәһең дә бешәһең.*



ИНТЕРНЕТТАН



## БУЯУҘЫ...
### самалап ҡуллан

■ Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙарға тышҡы ҡиәфәтен аҙна һайын үҙгәртергә мөмкинлек бар. Сәсен бер көн - ҡыҙыл, бер көн йәшелгә буяусылар ҙа юҡ түгел. Әммә һөт биҙе яман шешен өйрәнеүсе ғалимдар бының зарарлы булыуын белдерә. Йылына 2-5 тапҡыр ғына сәс буярға ярай, тип иҫкәртә улар. Бер үк ваҡытта яман шеш хәүефен түбәнәйтеү өсөн максималь рәүештә тәбиғи аҙыҡ-түлек ашауға күсергә кәрәк. Сәс буяуҙарын йыш ҡулланыу һөт биҙе яман шеше хәүефен 14 процентҡа арттыра. Шул уҡ ваҡытта, статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡатын-ҡыҙҙар сәсен уртаса 4-6 аҙна һайын буяй. Хна, гөлйемеш кеүек тәбиғи экстракттарҙан торған буяуҙар урынына химик буяуҙарға өҫтөнлөк бирелә. Сәс буяуы ғына түгел, башҡа төрлө косметика ла йыш ҡулланыла, ә уларҙың ҡайһы берҙәре канцероген тәьҫиргә эйә.

■ Артыҡ ауырлыҡ сәләмәтлек өсөн ҙур зыян килтерә - был сер түгел. Шулай ҙа тиҙ ябығыу ҙа организмға яҡшы тәьҫир итмәй. Яңы ғына АҠШ диетологтары тикшеренеүҙәр үткәрҙе һәм аҙнаһына нисә килограмм ауырлыҡ ташлау мөмкин икәнлеген асыҡланы. Улар билдәләүенсә, артыҡ ауырлыҡты кәметеү өсөн бер аҙна ғына аҙ, бының өсөн оҙаҡ ҡына ваҡыт талап ителә. Дөрөҫ туҡланыу ҡағиҙәләрен күҙәткәндә һәм физик күнегеүҙәргә ваҡыт бүлгәндә тәүге аҙнала яҡынса 1 килограмм ташларға була. Иң мөһиме, был организмға зыян итмәй. Тәүге аҙнала организмдан май түгел, ә һыу китә. Артабан аҙнаһына 500 грамм тирәһе ташларға кәрәк. Хәүефһеҙ ябығыуҙы тиҙләтеү өсөн диетологтар туҡланыу рационына калориялар дефицитын күҙәтеп ҡатмарлы углеводтар индерергә кәңәш итә. Ашаған калорияларҙы яндырыу ҙа кәрәк.

■ Ҡара көртмәле бик файҙалы еләк. Рединг университеты ғалимдары билдәләүенсә, ул мейе әүҙемлеге сығанағы булып тора. Ҡара көртмәлелә күҙәнәклек күп, шул уҡ ваҡытта шәкәр аҙ. Имтихандар алдынан көртмәле ашарға кәрәк. Һынауҙарҙа балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре ҡатнашҡан. Улар компьютер экранындағы уҡты күҙәткән һәм уның йүнәлешен күрһәткән клавишаларға баҫырға тейеш булған. Был мәсьәлә алдынан көртмәле һутын эскән балалар был күнегеүҙе башҡаларға ҡарағанда 10 процентҡа уңышлыраҡ башҡарған. Быға тиклем дә ғалимдар ҡара көртмәленең антиоксидант тәьҫирен асыҡлағайны инде. Ул организмдағы шешеү процестарын да туҡтатыу сифатына эйә. Ҡара көртмәлелә флаваноидтар күп.

■ Вандербильт университеты хеҙмәткәрҙәре Ҡытайҙа йәшәүсе 40 йәштән 70 йәшкә тиклемге 75 мең ҡатын-ҡыҙ араһында һынауҙар үткәргән. Улар мәктәптә уҡығанда һәм йәш саҡтағы физик әүҙемлеге тураһында һөйләгән. Һорау алыуҙар һәр 2-3 йыл һайын ҡабатланған. Бер үк ваҡытта уларҙың сәләмәтлек торошо ла күҙәтелгән. Кем йәш сағында спорттың команда төрө менән даими шөғөлләнгән, уларҙа яман шеш, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре һирәгерәк осраған. Даими күнегеүҙәр тигән төшөнсәгә өс ай дауамында аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла спорт менән шөғөлләнеү ингән. Кем йәш сағында физик әүҙемлеккә күп ваҡыт бүлгән, улар ҡартайғас та үҙен сәләмәт тойған, яман шештән - 13, йөрәк сирҙәренән 17 процентҡа һирәгерәк үлгән.

*ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!*

**Учалы ағинәйҙәре боронғо башҡорт халыҡ йолаларын тергеҙеүҙе дауам итә. Был юлы беҙҙе: "Үҙем әҙерләгән, йәнгә һәм тәнгә ҡеүәт биреүсе эсемлектән ауыҙ итегеҙ!" - тип ҡаршы алды Ҡунаҡбай ауылы ағинәйҙәре. Баҡтиһәң, улар халҡыбыҙҙың туҡланыу йолаһына арналған сара үткәрергә йыйылған икән.**

# КӨҘГӨ ҠАТЫҠ БАЙРАМЫ



Ишек төбөнән үк шифалы эсемлек тураһында мәғлүмәт биреп, уны туҫтаҡҡа һалып, килгән ҡунаҡтарға һондолар. Туҫтаҡтағы шифалы эсемлекте бер тынала һемерҙем дә ҡуйҙым. Ҡунаҡбай ауылы ағинәйҙәре етәксеһе Хәлимә апай Ғатауллина был эсемлектең составы тураһында мәғлүмәт бирә: ул һөт, эремсек, банандан тора икән. Ҡарап тороуға, ябай ғына ҡушылмаларҙан күпертеп бешелгән коктейль, ә тәме... телеңде йоторлоҡ! Ғүмере буйы мәктәптә эшләгән, хаҡлы ялдағы педагог Хәлимә Нәжип ҡыҙы етәкләгән ағинәйҙәр ҡоро ауылдағы иң абруйлы тиҫтәләгән апай һәм инәйҙәрҙе берләштерә. Ауыл мәҙәниәт йортондағы "Көҙгө ҡатыҡ - көмөш ҡашыҡ" тип аталған әлеге һөт ризыҡтары байрамының төп хужабикәләре лә улар. "Ә ни өсөн көҙгө ҡатыҡ?" тип ҡыҙыҡһынам ҡатыҡ тәмләгән арала. "Сөнки ул яҙғыһына ҡарағанда тәмлерәк тә, туҡлыҡлыраҡ та. Ни тиһәң дә, ҡоро бесән ашап, бер аҙ миктәп ҡыш сыҡҡан һыйыр һөтөнән эшләнмәгән бит ул", - тигән яуап алам.

Ҡунаҡбайҙар байрам түренә шулай уҡ Илтабан, Юлдаш, Һәйтәк, Иманғол, Мансур, Көсөк, Сораман, Миндәк ауылдары ағинәйҙәрен дә саҡырған. Улар ҙа үҙҙәре әҙерләгән һөт ризыҡтарынан күргәҙмә ойоштороп ебәргән. Һәр береһе ҡунаҡтарҙың ошо күргәҙмәләрҙәге ризыҡтарҙы күҙҙән үткәреүен теләп, бер-береһен бүлдерә-бүлдерә мәғлүмәт бирә, башҡортҡа ғына хас ихласлыҡ менән ризығын тәмләп ҡарауҙы үтенә. Шул арала "аҡтан" әҙерләнгән ризыҡтарҙың рецебы тураһында ла һөйләп, уларға бәйле ырымын, мәҡәл-әйтемен дә әйтә һалалар. Ысынлап та, һөткә "аҡ" тип өндәшеү генә лә ошо ризыҡтың изге булыуын, уны ҙурлауҙы аңлатып тора шул. Унан һуң, "аҡ" тип атап, изге ризыҡтың исемен йыш ҡабатлап, уның тәмен-йәмен ебәреүҙән дә һаҡланғандарҙыр. Бер ни менән алыштырғыһыҙ был шифалы ризыҡты "Йәшәү эликсиры" тип тә атайҙар бит. Ә уның балалар өсөн файҙаһын һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел! Әгәр ошо байрамда ҡатнашмаған булһам, һөттән әллә күпме ризыҡ әҙерләнеүе хаҡында белмәй ҡалыуым ниндәй ҙур үкенес булыр ине. Ә уның ниндәйе генә юҡ ине бында: ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, ҡыҙыл эремсек, һөҙмә, сыр, айран, ҡымыҙ, май, муйыллы май, сейәле май, күбек майы, һынап та бөтөрлөк түгел... Көсөк ауылы ағинәйҙәре күргәҙмәһендә генә 30 төрлө һөт ризығын һананыҡ. Әйткәндәй, "күбек майы" тигәнде күптәр белмәйҙер ҙә әле. Заманында ул башҡорттарҙа бик популяр шифалы ризыҡ була. Ә тәмлелеге... ауыҙҙа иреп кенә тора. Ысын мәғәнәһендә деликатес! Ә ниңә бөгөн дә уны яһамайҙар икән, тип ҡыҙыҡһынам. Ысулын белгән апайҙар уны әле лә танһыҡҡа яһайҙар икән яһауын, тик уның технологияһы күп көс талап итә, тип аңлаттылар. "Ә мин уны бик йыш яһайым, - тине шунда Миндәктән Гөлйемеш Рәкипова. - Уны әҙерләү ысулы беҙгә быуындан-быуынға тапшырыла килә. Күбек майы шуныһы менән ҡиммәт: унда холестерин бөтөнләй юҡ. Шундай бер ысулды һеҙгә лә өйрәтә алам: 500 грамм ауыл ҡаймағына айыртылған ауыл һөтөнән 2 литр ойотҡо һалаһың да, май яҙылғансы бешәһең дә бешәһең (ҡымыҙ бешкән кеүек). Шунан күбек майы килеп сыға, айырылып сыҡҡан һыуы - айраны ла тәмле һәм файҙалы... "

Күргәҙмәләрҙе ҡарап, һөт ризыҡтарынан, иң мөһиме, байрамға исем биргән көҙгө ҡатыҡтың төрлөһөнән ауыҙ итеп, уның ысынлап та башҡа миҙгелдәрҙәге ҡатыҡтан өҫтөнлөгөн аңлау дәрәжәһенә еткәс, сәхнә тамашалары башланды. Театрлаштырылған йола байрамы йәйге йәйләүҙәренән ҡышлаҡтарына ҡайтыусы башҡорттар тормошон һүрәтләүгә бағышланды. Шул рәүешле халыҡтың төп йәшәү рәүеше малсылыҡ менән бәйле булыуына ишара яһалды. Ҡышлауға ҡайтыу күренештәре йорт-ҡаралты, мал-тыуар именлегенә һәм иҫән-аман ҡышлап сығыуға арналған һәр төрлө халыҡ йолалары менән оҙатыла барҙы. Ҡунаҡбайҙарҙан һуң берәм-берәм башҡа ауыл ағинәйҙәре сығыш яһаны, улар ҙа мал-тыуарға бәйле йолаларҙы сәхнәләштереп күрһәтте. Һәр хәлдә, әллә күпме йола барлығын белдек, мал-тыуарға бәйле әллә күпме ырымдар, мәҡәл-әйтемдәр ишеттек. Мәҫәлән, һатып алғанда мал хужаһына үҙенсәлекле генә бүләк бирергә тейешһең икән. Малың менән бергә аҙбарыңдың ҡото китмәһен тиһәң, һатып алыусы күрмәгәндә генә һыйырыңдың йөнөн ҡырҡып алып, бер урынға ҡыҫтырып ҡуйыу кәрәк, имеш. Һатып алған кешенең малды ихатанан алып сыҡҡанда артына әйләнеп ҡарамауы ла мөһим - малдың ҡото китмәҫ, тиҙәр. Башҡорттар элек үҙ йорттары эргәһендәге ҡаҙыҡҡа малдың баш йә һалыу һөйәген элеп ҡуйыр булған. Малдың күпләп үрсеүенә ишаралаған бер ырым икән быныһы ла.

Ә бына Сораман ауылы ағинәйҙәре Зөбәйҙә Ҡәләмова менән Сәғиҙә Ҡотоеваларҙың мәғлүмәте үтә лә урынлы булды:"Көҙ етһә, мал юғалыусан бит инде, - тине улар. - Мал менән донъя көткән беҙҙең халыҡ өсөн был бик күңелһеҙ хәл. Шуның өсөн шундай ырымдар өйрәтәбеҙ. Мал ихатанан сыҡҡанда уға "Йә Аллаһу Рәҡиб" тип өрөргә кәрәк. Һәм тағы бер ырым. Күпмелер ҡом алып, уның өҫтөнә "Һыйыр" сүрәһенең 284-се, 285-се, 286-сы аяттарын уҡып өрәһең һәм шул ҡомдо малдың юлына һибеп сығаһың... Беҙ шулай итәбеҙ һәм, шөкөр, малдарыбыҙ имен йөрөй".

Район ағинәйҙәре үткәргән сараларҙың барыһында булмаһа ла, һирәкләп ҡатнашырға тырышыла. Һәм һәр саранан халҡыбыҙҙың рух байлығына, матур йолаларына, милли кейемдәребеҙгә таң ҡалып, оло тәьҫораттар менән ҡайтыла. Ниндәй ғәжәп бер күренеш булды әле был ағинәйҙәр хәрәкәте, тип уйлайым һәр ваҡыт. Ошо хәрәкәттең башында тороусы Гөлфиә апай Янбаева менән был байрамда ла күрешергә яҙҙы. Һәр осрашҡан һайын ул башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының фиҙаҡәрлегенә, әүҙемлегенә, рух көсөнә һоҡланыуын белдерә, улар башҡарған ғәмәлдәр тураһында ғорурланып һөйләй. Уның фекеренсә, ағинәйҙәр ойошторған һәр сара башҡорт милләтенең асылын, шулай уҡ башҡорт халҡының күпселеге төйәк иткән ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуҙа, боронғо йола-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеүҙә бик ҙур әһәмиәткә эйә. Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Учалы ағинәйҙәренең был йәһәттән иң әүҙем һәм берҙәм эшләүсе ойошма булыуын, шуға ла улар үткәргән сараларҙа бик теләп ҡатнашырға тырышыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. Уның һүҙҙәрен Учалы районы ағинәйҙәре ойошмаһы рәйесе Мәрзиә Солтанбаеванан йөпләттем:

- Ысынлап та, районыбыҙҙың йәмәғәт тормошонан ситтә ҡалмаҫҡа, һәр бер сарала әүҙем ҡатнашырға тырышабыҙ, - тине Мәрзиә Сәғит ҡыҙы. - Халҡыбыҙ традицияһы һәм йолаларын тергеҙеүгә күп көс һалабыҙ. Беҙҙең башҡорт милли мәҙәниәте иҫ киткес бай һәм күп яҡлы бит ул, уның тәрбиәүи сығанаҡтарын тулыһынса файҙаланырға ынтылабыҙ. Ошо маҡсаттарҙа беҙ һәр ауылда алдан билдәләнгән темалар буйынса саралар үткәрәбеҙ. Мәҫәлән, Миндәктә буҙа байрамы ойошторһаҡ, Килмәктә - "Өләсәйем һандығы"н, Мансурҙа халыҡ медицинаһының дауалау йолаларын күрһәттек. Бына әле һөт ризыҡтарына, уға бәйле ырым-йолаларыбыҙға мөрәжәғәт итеп, хәтер яңырттыҡ...

Был халҡыбыҙҙың ғәжәйеп йола ҡоронда билдәле шағирә Зөлфиә Ханнанова, Белорет районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Зилә Абзалова, етәкселәре Роза Таһирова менән бер төркөм Әбйәлил районы ағинәйҙәре лә ҡатнашты һәм байрам шатлығын уртаҡлашты. Зөлфиә Ханнанованың рухлы шиғырҙары ҡорҙағы бер кемде лә битараф ҡалдырманы, күңелдәр тулышты, күҙҙәр йәшләнде... Ағинәйҙәребеҙ әүҙемлеге, егәрлелеге, сәме менән йәшәйешебеҙгә йән өрә, шағирәләребеҙ башҡорт һүҙен, башҡорт аҡылын шиғри юлдарға һалып, ғәмебеҙҙе ҡуҙғыта. Донъяны ҡатын-ҡыҙ ҡотҡарыр, тигән оран хаҡ булып сыға түгелме һуң былай булғас...

**Әнисә ЯНБАЕВА.**

*✓ Ғаилә тормошом килеп сыҡманы. Ир менән йәшәүҙең дә үҙ нескәлектәре барлығын һуңлап аңланым. Мине бит ул тормошҡа берәү ҙә әҙерләмәне. Хәҙер килеп шуны аңлайым: атайыма ундай ҡатын менән йәшәү ауыр булғандыр.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# ӘСӘ ҺӨЙӨҮЕ...

## бәхетлерәк итә баланы

**"Бәйләнештә"ге диуарымда бәхет хаҡында бер яҙмам бар ине, шуға комментарий итеп ул ошо СМС-ты һалды. Интернеттағы таныш түгел танышымдың әсенеп яҙған хәбәренән шаңғып ҡалдым. Ул был хатын үҙ диуарыма алып ҡуйыуымды һораны, башҡа әсәйҙәр фәһем алһын, тигән теләген еткерҙе. Бына ул хаттың йөкмәткеһе:**



"Бик күп йылдар мин "Әсәйем үлһә ине..." тигән уй менән йәшәнем, - тип яҙып китә был ҡатын. - Үҙемдә белә-белгәндән алып кеше дошманына теләмәстә иң яҡыныма теләнем. Уҫаллығымдан, яуызлығымдан түгел был, ә үпкәмдән һәм бүтәнсә әсәйемдән ҡотолоу юлын күрмәгәнлектән. Әгәр ул үлһә, атайым икенсегә өйләнер ҙә, минең тормошом башҡасараҡ булыр, тип уйланым. Хатта ауылдағы иң ағыулы яңғыҙ апайҙы үҙем атайыма етәкләп алып ҡайтыр инем, тип хыялдар ҡорҙом.

Юҡ, эскесе тип уйламағыҙ әсәйемде, киреһенсә, бер тамсы ла ҡапмай ул. Әсһен ине, ҡай берәүҙәр эскән сағында асылып китеп һөйләшә, асыла бит. Уның шундай сағын бер генә булһа ла күргем килеп йәшәнем. Тик уның рәхәтләнеп, бар күңелен асып һөйләшкәнен дә, шарҡылдап көлгәнен дә ишетмәнем. Үтә ҡоро һәм таш кеүек ҡаты кеше ул. Йән тартмаһа ла, ҡан тарта, тиҙәр. Йәнем дә, ҡаным да тартмай уға. Белә-белгәндән үҙем менән көрәштем, әсәйҙе аңларға, яратырға тырыштым. Ахыр сиктә, бер ни ҙә килеп сыҡмағас, үлһә ине ул, тип теләй башланым. Бының насар уй, теләк икәнен аңлар йәшкә еткәс, үҙемдә мең гонаһлы бәндәгә һанап, тәүбәгә килдем. Тик күңел генә китек килеш ҡала килде.

Әсәйем үтә уңған кеше. Уңған тиеү генә аҙ ҙа кеүек, эшкә әрһеҙ, тиҙәр ундайҙар хаҡында. Уға донъяла ат кеүек егелеп эшләүҙән мөһимерәк бер ни юҡ. Донъябыҙ һәр саҡ ялт итеп тора. Иҙән йыуғысыбыҙ ҡуптәрҙең бит-ҡул һөрткән таҫтамалынан таҙараҡтыр...

Ҡуптәр мине битәрләр, беләм. Тағы ни кәрәк быға, тиерҙәр. Кәрәк икән шул. Наҙ, йылы ҡараш, күңел бөтөнлөгө кәрәк. Мин быларҙың береһен дә күрмәнем. Бала саҡтан гел эш өҫтөндә булдым. Тиҫтерҙәрем рәхәтләнеп һыу инеп, ҡомда ҡыҙынғанда, мин оҙон көндәр буйы бәпкә һаҡланым, кистәрен улар йыйылышып ҡапҡа төптәрендә уйын уйнағанда, баҡса утаным, һыу ташыным, һыйыр һауҙым. Әхирәттәрем, ҡултыҡлашып, һөйгән егеттәре менән уйындан ҡайтҡанда, мин лампа яҡтыһында шәл бәйләнем. Ҡул ҡаушырып телевизор ҡарау ҙа беҙҙең өйҙә тыйылған нәмә ине. Әсәй шундуҡ йүгертеп килтереп йә бәйләмен тоттора, йә телевизорҙы бөтөнләй һүндереп ҡуйыр булды.

Йомоҡ булып үҫтем. Башым тулы хыял булһа ла, эсем тулы ут ине. Сөнки минең кисерештәрем берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырманы. Кескәйҙән һүрәт төшөрөргә яраттым. Яҙ етеп, кәбән башы асылыу менән, ҡәләмдәремде алып, шунда менеп ултырам. Үҫкәс, архитектор булам, тип хыялланам. Тик әсәйҙең "бушты бушҡа ауҙарып", "эш ҡалдырып", "юҡ менән булып" тигән һүҙҙәренән бар хыялым ауылып төшөр ине. Мәктәптәге уҡыуым да уны ҡыҙыҡһындырманы, институтҡа ла үҙем генә барып индем. Ауылдан бер аҙым сыҡмаған бала, нисек яңғыҙым уҡырға инәм тип сығып киттем икән, тип әле булһа аптырайым. Әлеге шул әсәйҙең эшен бөтөрәм тип тырышып, үҙем теләгән бүлеккә һуңлағайным инде. Күңел ятмаған һөнәргә теләр-теләмәҫ кенә уҡып йөрөнөм, ауылға йылына бер ике генә ҡайттым, әсәйҙән һыуыныуымды шунда аңланым. Уның институттағы уҡыуым тураһында һорашҡаны ла булманы. Ә минең төрлө саҡтарым булды. Тик әсәйгә генә һыйыр серҙәрем йыйылып киткәндә, юҡ менән сейләнеп ултырма, тип екерер ине.

Үҙемә оҡшамаған һөнәр һайлауым иң ҙур хатам булды. Тормошта юғалып ҡалдым. Унда бәрелдем, бында төртөлдөм. Үкендем. Шунан кейәүгә сыҡтым. Әсәйем буласаҡ иремдең кем икәнен дә һорашманы. Ә мин һаман унан наҙлы, аҡыллы һүҙҙәр көттөм.

Ғаилә тормошом килеп сыҡманы. Ир менән йәшәүҙең дә үҙ нескәлектәре барлығын һуңлап аңланым. Мине бит ул тормошҡа, мөнәсәбәттәргә берәү ҙә әҙерләмәне. Хәҙер килеп шуны аңлайым: атайыма ундай ҡатын менән йәшәү ауыр булғандыр. Бер йылы һүҙ, ағымлы ҡараш күрмәне. Башын баҫып эшләп тик йөрөнө. Урмандан, баҫыуҙан ҡайтып инмәне. Ни эшләп икенсе ҡатынға сығып китмәне икән? Бар ғүмерен ташҡурсаҡ менән үткәрҙе. Әсәйҙең һүҙенән сыҡманы үҙе. Көслә, ҡыйыу атайҙарға ҡыҙығып ҡараным. Ир булып, ырғып тороп бер өҫтәл төйһөн ине, тип көткән саҡтарым аҙ булманы..."

Был хат ошо урында өҙөлөп ҡалды. Был ҡатындың яҙғандары мине уйға һалды. Бындай яҙмышлы (уйлап ҡараһаң, бик үк ҡурҡыныс яҙмышлы ла түгел кеүек үҙе! Таҙа өйлә, өҫ-башы бөтөн, тамағы туҡ балаға башҡа ни кәрәк, тип уйлайһың) балалар юҡ түгел арабыҙҙа, әсәйҙәргә лә, ваҡыты-ваҡыты менән үҙ холоҡтарын, ҡылаыштарын, балаларына ҡарата мөнәсәбәттәрен тәнҡит күҙлегенән үткәреп, бүтәнсәрәк ҡыйыуталар яһарға өйрәнергә кәрәктер. Беҙ бит "Әсә күңеле - балала, баланыҡы - далала", "Ожмах әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында" тигәндәрҙе белебеҙ, ә сабый күңелендә ниндәйерәк уй-кисерештәр ятыуы хаҡында уйланабыҙмы? Ошо һеңлекәш ише зарлы ҡыҙҙар үҫтереп ятмайбыҙмы икән? Әсә ҡарашенә мохтаж саҡтарында, донъя мәшәҡәтенә һылтанып, уларҙан йөҙ бормайбыҙмы?..

Бер нисә көндән унан тағы СМС килде:

"Әсәйем янына ҡайтып килдем әле. Бер йылға яҡын ҡайтҡаным юҡ ине. Тағы төңөлөп килдем. Хәйер, тәү тапҡыр ғына түгел бит инде. Ҡуҫтәнәс, бүләктәремә әйләнеп тә ҡараманы. "Акса әрәм итеп..." Бөтә һүҙе шул булды. Ултырып иланым-иланым да, әхирәтемә барып йоҡланым. Уларҙың өйҙәре лә йыйыулы түгел, ҡул таҫтамалдары беҙҙең иҙән йыуғысынан да ҡайтыш, ә шулай ҙа рәхәт унда. Көлөшөп сәй эстек, һөйләшмәгән һүҙ ҡалманы. Барыһы ла бәхетлеләр..."

Аҙаҡҡы һөйләмен бер яҙҙы, бер юйҙы, тағы яҙҙы, тағы алып ташланы был ҡатын. Тағы яҙҙы. Мин иһә, уның кисерештәрен үҙ күңелем аша үткәреп, сабыр ғына һүҙ ялғаныуын көттөм.

"Яҙығыҙ әле ошо турала, тик гәзиткә. Интернетта ултырмай минең әсәй. Бәлки, ул хатаһын таныр. Ғәфү үтенер. Үҙгәрер. Мин инде уның үлемен теләмәйем, әйҙә, йәшәһен. Мине тапҡан, үҫтергән бит, ҡалайтһаң да. Гелән берәй ҡушҡан эшен эшләмәһән, бушҡа тапҡанмын мин һине, ти торғайны. Әйтерһең, баланы эшләтер өсөн табалар.

Бер туҡтауһыҙ ерҙә соҡоноуҙан ярғысланып, сөйәлләнеп бөткән ҡулдарыма егеттәр ҙә ҡағылманы. Сирҡанып ҡаранылар. Үҙем ғашиҡ булып йөрөгәне иһә, һинән һыйыр еҫе килә, тип мыҫҡыллаңы..."

"Тыныслан, һеңлекәш. - Ашыға-ашыға ошо һүҙҙәрҙе яҙған булдым, күңеле яралы ҡыҙ баланың һөйөү көҫәгән йәнен һүҙҙәр менән генә булһа ла имләгем килде. - Әсәйеңде аңларға һәм ғәфү итергә тырыш. Әсә хаҡы бар бит!"

"Әсә хаҡы, имеш... Ә бала хаҡы бармы ошо донъяла?"

Уның был һүҙҙәренән һуң, башымдан йәшен тиҙлегендә сабыйҙарын ташлаған әсәләр, әсә йәберендә үҫкән, хатта улар ҡулынан һәләк булған балалар тураһында уйҙар үтә. Ысын әсә булмағандарҙы әсәй булған өсөн генә яратып та булмайҙыр шул...

Был ҡыҙҙың "Әсәйем үлһә ине" тигән һүҙҙәрен аҡылым менән дә, күңелем менән дә ҡабул итмәһәм дә, артыҡ тәнҡитләргә лә ашыҡмайым. Яҡынына үпкәһе ҙур уның. Шуны беләм. Әсә һөйөүендә үҫкәндәрҙең яҙмышы башҡасараҡ булыуын да беләм. Ундайҙар тормошҡа еңелерәк яраҡлаша, һирәгерәк яңылыша. Әсә һөйөүе көслөрәк, бәхетлерәк итә уларҙы. Балаларыбыҙ менән беҙҙе, әсәйҙәрҙе бәйләп торасы ҡылдай нескә, шул уҡ ваҡытта донъялағы иң ныҡлы хис һәр ҡайһыбыҙҙың йөрәгендә һаҡланһын ине.

...Үҙем әсәй, үҙем бала мин. Ҡайһыһының хаҡы юғарыраҡ икән?

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Һәр кем яратҡан эшен башҡарһа, юлдарға кем асфальт түшәр?

Был эш һеҙҙең күңелегеҙгә ятмаһа ла, донъяла юлдарҙы ремонтлау менән теләп, ихлас шөғөлләнеүселәр ҙә бар: берәү ҙә телефондан шылтыратып баш ҡатырмай, көн оҙоно саф һауалаһың, музыка ебәрәһең дә... Ғөмүмән, һәр эштең үҙ өҫтөнлөгө.

Беҙ төрлө-төрлө, һәм һәр ҡайһыбыҙ ниндәйҙер эш менән шөғөлләнергә ярата. Һәр кем үҙ юлынан үҙ тиҙлеге менән бара. Әгәр яратҡан эшең менән шөғөлләнеү өсөн юлыңдан тайпылһаң, урыныңды икенсе кеше биләйәсәк.

### Яратҡан эшемде тапһам, проблемаларым кәмерме?

Юҡ! Сөнки тормош маҡсаты - проблемаларҙан азат булыуҙа түгел, ә тормошто ҡыҙыҡлы итеүҙә!

Яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнә башлап, үҙегеҙгә матур йәшәү өсөн ҙур мөмкинлек асаһығыҙ. Сөнки мөхәббәт - ул энергия һәм яратып башҡарылған һәр нәмә ошо энергия менән тулып, билдәле бер шарттарҙа аҡсаға әйләнә. Әммә күңел ҡайтыу, ауыр мәлдәр тормоштан бер ҡайҙа ла юғалмай. Шуға күрә ошо темаға яҙылған күп китаптарҙа: "Яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнегеҙ һәм аҡсаны көрәп ала башларһығыҙ", - тигән уйҙырмаларға ышанмағыҙ. Ҡыҫҡаһы, яратҡан эш менән шөғөлләнеү - ул еңел тормош рецебы түгел. Ә күңелле тормош рецебы. Бындай тормошта проблемалар ҙа, хәстәрлектәр ҙә күберәк буласаҡ!

### "Бәхетле бул!"

Ошо атамалағы беренсе китабымды яҙып бөтөп, ҡулъяҙмамды нәшриәтселәргә тәҡдим итә башлағас, улар барыһы ла бер тауыштан, донъяла камиллашыу тураһында китаптар быуа быуырлыҡ, тип белдерҙе. Етмәһә, бындай китаптар яҙыр өсөн психиатр булырға кәрәк, тип тә өҫтәп ҡуйҙылар. Улар менән бары тик берәү генә килешмәне, ул психиатрҙарға, киреһенсә, минең кәрәклегемде билдәләне.

Ярты йылдан һуң Сингапурҙа алдынғы ҡарашлы кешеләр эшләгән нәшриәт таптым. Улар китап баҙарында дәғүәселектең бик юғары булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, билдәһеҙ автор матбуғатты ла, телевидениены ла ҡыҙыҡһындырмаясаҡ, тине. Нимәләр уйларға кәрәк ине.

Халыҡҡа китап тураһындағы мәғлүмәтте үҙем еткерергә булдым. Тираж һатыуға сыҡҡас, мольберт һәм микрофон алып, ҡаланың бөтөн китап магазиндарын урап сыҡтым. Үҙемдең карикатураларымды төшөрҙөм, тормош фәлсәфәмде аңлаттым, китаптарға ҡултамғалар һалдым. Университеттарҙа студенттар алдында сығыш яһаным, офистарҙа хеҙмәткәрҙәр менән аңгәмәләштем. "Бәхетле бул!" китабы Сингапурҙың бестселлерҙар исемлегенә эләккәнгә тиклем ошо план буйынса эшләүҙе дауам иттем. Һуңынан ошо уҡ алымды Малайзияла, Австралияла һ.б. ҡулландым.

**Эндрю МӘТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 30 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Непокорная". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
02.15, 03.05 "Чужой". Фантастический боевик (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Доставка". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Дом фарфора". 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Бегущая от любви". Мелодраматический сериал (12+).
02.45 "Фамильные ценности". Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Лапушки". Сериал (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Автограф" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Бизнес-проба" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.45 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" - "Рубин" (Казань).**
**22.00 "На пути в Пхенчхан" (12+).**
**23.00 "История одной любви" (12+).**
**23.30 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Робинзон Крузо". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 31 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 00.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Непокорная". 3-я и 4-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
01.30, 03.05 "Чужие". Фантастический боевик (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "С чистого лица". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Дом фарфора". 3-я и 4-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Бегущая от любви". Мелодраматический сериал (12+).
02.45 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Лапушки". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.20 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**17.00 "Учим башкирский язык".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Орнамент".**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Золотая пыль". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 1 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 00.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Непокорная". 5-я и 6-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
01.30, 03.05 "Чужой-3". Фантастический боевик (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Мальчик со скрипкой". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Дом фарфора". 5-я и 6-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Бегущая от любви". Мелодраматический сериал (12+).
03.45 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Лапушки". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**
**17.45 "Профессия - учитель" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Оседлавший кита". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 2 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Непокорная". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
02.25, 03.05 "Чужой-4: воскрешение". Фантастический боевик (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Верное средство". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Дом фарфора". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.50 "Александр Третий. Сильный, державный..." (12+).
01.55 "Бегущая от любви". Мелодраматический сериал (12+).
03.55 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Лапушки". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 19.00, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 21 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**15.15 "Учим башкирский язык".**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**1.20 Хоккей. КХЛ. "Куньлунь РС" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Много шума из ничего". Худ. фильм.**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 3 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым". Общественно-политическая программа (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.25 "Кэри Грант". Док. фильм (16+).
01.30 "Обезьяньи проделки". Комедия (12+).
03.20 "Большой год". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 Юбилейный выпуск "Аншлага" - нам 30 лет! (16+).
00.15 "Непутевая невестка". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
04.00 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Лапушки". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Ф.Буляков. "Половецкая мистерия" (12+).**
**14.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Современник" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирма".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**24.00 "Эпохи невинности". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.00 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

## 4 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Простая история". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Москва слезам не верит". Рождение легенды" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.20, 15.15 "Это наши дети" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Сегодня вечером" (16+).
19.50, 21.20 "Москва слезам не верит". 2 серии. Мелодрама.
21.00 "Время".
23.00 "Прожекторперисхилтон" (16+).
23.535 "Короли фанеры" (16+).
00.25 "Преданный садовник". Триллер (16+).
02.40 "Месть". Худ. фильм (16+).
04.55 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.05 "Мимино". Худ. фильм.
07.05 "Любимые женщины Казановы". Сериал (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Дневник свекрови". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
18.20 "День народного единства" с Андреем Малаховым" (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Притяжение". Фантастика (12+).
23.15 "Веселый вечер". Юмористическая программа (12+).
01.10 "Соседи по разводу". Мелодрама (12+).
03.10 "Дабл Трабл". Худ. фильм (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Приключения поросенка Фунтика" (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (6+).**
**11.15 "Это мы!" (6+).**
**11.50 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**15.00 "Дарю песню" (12+).**
**17.00 "В единстве - сила" (12+).**
**19.00 "Звездный Байыҡ" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 01.45 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Идущий в огне". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Н.Гаитбаев. "Любви все возрасты покорны" (12+).**

## 5 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.45, 06.10 "Белорусский вокзал". Худ. фильм.
06.00 Новости.
07.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым "(12+).
10.00 Новости.
10.10 "Честное слово" с Юрием Николаевым".
11.00 "Моя мама готовит лучше!"
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.15 "Так хочется пожить..." к 95-летию Анатолия Папанова" (12+).
14.20 "Дети Дон Кихота". Лирическая комедия.
15.50 "Москва слезам не верит". Худ. фильм.
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Первый полуфинал (16=).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Финал осенней серии игр.
23.45 "Герой". Военная драма (12+).
01.15 Концерт Димы Билана.
03.05 "Французский связной". Худ. фильм (16+).
05.05"Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.50 "От праздника к празднику". Худ. фильм(12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
13.35 "Идеальная пара". Худ. фильм (12+).
15.35 "Стена". Игровое шоу (12+).
16.50 "Удивительные люди-2017" (12+).
20.00 "Вести недели".
21.40 "Демон революции". 1-2-я серии. Исторический сериал (12+).
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.30 "Русская смута. История болезни" (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Незнайка встречается с друзьями" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк.яз.).**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Органная мистерия" (12+).**
**18.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**19.15 "Дознание" (16+).**
**19.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**20.00 Новости недели.**
**20.45 Футбол. РФПЛ. ФК "Спартак" (Москва) - ФК "Уфа".**
**23.00 "Красная кнопка" (16+).**
**23.45 "Вечер.com" (12+).**
**00.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.30 "Разрыв". Худ. фильм (16+).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҢЫ ҠЫҪАЛА ТӨРӨ



**Һыу аҫты мәмерйәһе белгестәренең Һаҡаҫҡы мәмерйәһендәге сенсациялы табышы ғилми рәүештә раҫланды. Йомағужа һыу һаҡлағысы төбөндә табылған һуҡыр ҡыҫалалар - донъяла башҡа бер ерҙә лә осрамаған ҡыҫалаларҙың уникаль төрө, тип хәбәр итә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы.**

Ғалимдарҙың асышы ҙур бәхәс тыуҙырҙы. Ер шарында йылына 10-лаған яңы хайуан төрө теркәлә. Шуға мәғлүмәт ғилми нигеҙләүҙе талап итте. Башҡорт дәүләт педагогия университеты лабораторияһында уникаль төрҙә тулыһынса тикшерҙеләр. "Башҡортостанда һыу аҫты мәмерйәләре бик үк өйрәнелмәгән, беҙҙә тағы ла күберәк ҡыҙыҡлы асыштар көтә, тип уйлайым. Ҡыҫалаларҙы өйрәнә башлауҙан тыш, Һаҡаҫҡы мәмерйәһендәге һыуҙы тикшерәбеҙ һәм тағы ла берәй ҡыҙыҡлы нәмә табырға өмөтләнәбеҙ", - тип һөйләне Башҡорт дәүләт педагогия университетының тәбиғи-география факультеты деканы Наталья Суханова. "Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, экспедицияла Екатеринбургтан, Санкт-Петербургтан, Өфөнән һигеҙ һыу аҫты мәмерйәһе белгесе ҡатнашты. Бер аҙна эсендә улар 800 метр ара үтте, тәүге йөҙ метрын төшөрөп алды, водолаздарға эшләү өсөн арҡан һуҙҙы, ете ҡатлы йорт бейеклегендә ҙур "зал" асты һәм илле метр тәрәнлектә сөсө һыуҙа йәшәй торған яңы йәнлек төрөн - үтә күренмәле ҡыҫаланы тапты. Был һуҡыр умыртҡаһыҙҙарҙың һыу аҫтында йөҙләгән йылдар буйына үҫешеүе ихтимал.

# ТОРЛАҠ БЕҘҘӘ ҠИММӘТ...



**Өфө торлаҡҡа хаҡтар буйынса илдең иң ҡиммәтле 10 мегаполисы иҫәбенә инде. Ҡалала фатирҙың уртаса хаҡы 2,56 миллион һум тәшкил итә, бер квадрат метрҙың хаҡы - 59,6 мең һум, һатыуға ҡуйылған фатирҙың уртаса майҙаны - 50,8 квадрат метр.**

Торлаҡҡа иң юғары хаҡтар ғәҙәттәгесә Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта. Был ҡалаларҙа фатирҙы уртаса 8,3 һәм 4,8 млн һумға һатып алырға мөмкин. Артабан Владивосток, Екатеринбург һәм Ҡаҙан килә. Татарстандың баш ҡалаһында фатирҙың хаҡы - 2,7 миллион һум. Һамарҙа, Пермдә, Краснодарҙа һәм Силәбелә торлаҡҡа хаҡтар арзан. Мәҫәлән, Силәбелә фатир уртаса 1,6 миллион һум тора. "Эксперт" күсемһеҙ милек агентлығы селтәре мәғлүмәтенсә, Өфөләге икенсел баҙарҙа бер квадрат метрҙың уртаса хаҡы бөгөн 58,3 мең һум тәшкил итә. 2016 йылдың аҙағынан алып хаҡтар 1,5 процентҡа төшкән. Әгәр икенсел торлаҡҡа хаҡтар кәмеһә, яңы төҙөлгәндәренә, киреһенсә, арта. Хәҙер икенсел баҙарҙа квадрат метрҙың уртаса хаҡы - 61,1 мең һум. Өфөлә йәшәүселәр яҡын киләсәктә хаҡтарҙың тағы ла артыуын көтә. Респонденттарҙың 70 проценты дүртенсе кварталды күсемһеҙ милек һатып алыу өсөн уңайлы ай тип иҫәпләй.

# СИРҘӘН ҺАҠЛА, ХОҘАЙ!



**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы яман шеш менән сирләү кимәле юғары булған районларҙы иғлан итте.**

Ведомство яман шештең төрҙәре буйынса рейтинг төҙөнө. Башҡортостанда 2017 йылдың 9 айында 9 658 кешелә онкология сире асыҡланған. Сирҙе йышыраҡ республиканың Стәрлебаш районында асыҡлайҙар. Бында 100 мең кешегә 476,9 яман шеш осрағы тура килә. Кушнаренко (100 мең кешегә 406,2) һәм Әлшәй (447,1) районларында ла ауырыу кимәле юғары. Межгорьела (100 мең кешегә 143,3 осраҡ), Баймаҡ (194,5), Дыуан (177,9) һәм Бөрйән (201,9) районларында онкология сире һирәк осрай. Һөт бизе яман шеше ҡатын-ҡыҙҙар араһында киң таралған онкология сире иҫәпләнә. Республикала 1188 осраҡ теркәлгән. Икенсе урында тире яман шеше - 992 осраҡ (10,5%), өсөнсө урында иһә үпкә яман шеше - 984 осраҡ (10,4%).

# ҮӘТ, ФИҘАҠӘР!



**Бөйөк Британияла йәшәгән Башҡортостан егете Илсур Сөләймәнов телгә булышлыҡ итеү өсөн тәүге башҡорт YouTube каналын асҡан.**

"Мин бында башҡорт теленә ярҙам итеү өсөн үҙемдең башҡорт телендәге YouTube каналын булдырҙым. Ошо каналда сит илдә белем алыу, MBA һәм PhD-ға уҡырға инеү тәжрибәһе, MIT һәм Гарвардтағы конференцияларҙа ҡатнашыу, гранттар, визалар һәм ватандаштарыбыҙ хаҡында бәйән итәсәкмен. Яҙылығыҙ!" - ти блогер. Илсур Сөләймәнов Башҡортостандың Әбйәлил районы Хәлил ауылында тыуып үҫкән. 2005 йылда Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институтын тамамлаған. Әлеге ваҡытта Бөйөк Британияла үҙенең докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләй. Беренсе видеояҙмала блог авторы тамашасыларҙы үҙенең эшмәкәрлеге һәм эш урыны - Кардифф университеты менән таныштыра.

# БАЛАНДЫ УҠЫТАМ, ТИҺӘҢ...

**Әсәлек капиталы сертификаты алыуға хоҡуҡ биреүсе икенсе, өсөнсө йәки унан һуң тыуған балаға өс йәш тулғас, был аҡсаны мәғариф хеҙмәттәре өсөн тотонорға була.**

Аҡса Рәсәйҙәге тейешле хеҙмәттәр өсөн хоҡуғы һәм мәғариф программаларына дәүләт аккредитацияһы булған теләгән бер мәғариф ойошмаһына күсерелә. Уҡыу башланыу көнөнә баланың йәше 25-тән дә артыҡ булырға тейеш түгел. Бынан тыш, уҡыу осоронда ситтән килгән студенттарҙың дөйөм ятаҡта йәшәгәне өсөн дә әсәлек капиталы менән иҫәпләшергә мөмкин.

Сертификат хужаһына мәғариф ойошмаһы менән килешеүҙе йәшәгән (йәшәргә килгән) урындағы Пенсия фонды идаралығына йәки Күп функциялы үҙәккә илтергә кәрәк. Ғаризаны "Граждандың шәхси кабинеты" йәки берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталы аша электрон юл менән дә бирергә була. Был осраҡта ғариза яҙыусы 5 эш көнө эсендә Пенсия фонды идаралығына кәрәкле документтарҙы тапшырырға тейеш. Законға ярашлы, килешеүҙә баланың уҡыуы йә ятаҡта йәшәүе өсөн аҡса күләме һәм түләү ваҡыты күрһәтелә. Әсәлек капиталы аҡсаһын тотоноу тураһындағы ғариза буйынса ҡарар бер ай эсендә һәм ул ҡабул ителгәндән һуң 10 көндән дә һуңға ҡалмайынса уҡыу йорто иҫәбенә аҡса күсерелә.

Закон тормошҡа ашырыла башлағандан алып, әсәлек капиталын балаларҙың уҡыуы өсөн файҙаланыуҙы һорап, сертификат хужаларынан 8108 ғариза килде. Был маҡсатҡа күсерелгән аҡсаның дөйөм суммаһы 410 млн һумдан ашыу тәшкил итә.

**БР буйынса РФ Пенсия фондының матбуғат хеҙмәте.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Октябрь - Ноябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (10) дүшәмбе | 6:47 | 8:17 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 31 (11) шишәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |
| 1 (12) шаршамбы | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |
| 2 (13) кесе йома | 6:53 | 8:23 | 13:30 | 16:05 | 17:35 | 19:05 |
| 3 (14) йома | 6:55 | 8:25 | 13:30 | 16:03 | 17:33 | 19:03 |
| 4 (15) шәмбе | 6:57 | 8:27 | 13:30 | 16:01 | 17:31 | 19:01 |
| 5 (16) йәкшәмбе | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 15:59 | 17:29 | 18:59 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҒЛАН

Квитанции 91672561, 27794953, 85529458, 27770330, 27771537 выданные СК СПАО "Ресо-Гарантия", считать недействительными.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 октябрь "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**29 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**31 октябрь "Руди - never off..."** (А. Абушахманов), Рудольф Нуриевтың ғүмер миҙгелдәре 12+
**1 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия 12+
**2 ноябрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А. Островский), драма 12+
**3 ноябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 октябрь "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен) 0+
**29 октябрь "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер) 0+
Спектаклдәр 12.00, 14.00 сәғәттә башлана

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2, 3 ноябрь Премьера "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия 12+

ХОККЕЙ

# ӨС ЕҢЕҮ...
## һәм өс еңелеү

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы әлеге көнгә 43 мәрәй йыйып, КХЛ-дың Көнсығыш конференцияһында 5-се урынды биләй.**

Санкт-Петербургтағы матчта "СКА" менән осрашыу хужалар файҙаһына 4:2 иҫәбе менән тамамланды.

Хельсинкилағы уйында юлаевсылар ҡапҡаһын Бен Скривенс һаҡланы, ләкин "йәшел машина" көйәрмәндәренең ышаныһын аҡлай алманы.. Юлаевсылар 2:0 иҫәбе менән еңелеп, Мәскәүгә юл тотто.

Баш ҡалала иһә Өфө хоккейсылары үҙ көйәрмәндәренә байрам бүләк итте. "Динамо" менән уйында иҫәп "Салауат Юлаев" файҙаһына - 2:3. Был еңеү юлаевсылар өсөн айырыуса мөһим, сөнки әлегә тиклем Өфө хоккейсылары Мәскәүҙәге уйындарҙа ете йыл рәттән тик еңелеп килде.

Ситтәге уйындарҙан һуң юлаевсылар үҙ бозонда "Автомобилист", "Трактор", "Лада" һәм Магниторискиҙың "Металлург"ын ҡабул итте. Тәүге матчта Өфө уйынсылары беренсе булып иҫәпте асты һәм уйын барышында 5 тапҡыр гол индерҙе. Уйын хужалар файҙаһына 5:3 иҫәбе менән тамамланды.

"Трактор" менән дә осрашыу көсөргәнешле уҙҙы. Овертайм еңеүсене асыҡламаны, ә буллитта иһә ҡунаҡтар уңышлыраҡ булып сыҡты. Матч 3:4 иҫәбе менән ябылды.

Тольяттинан килгән команданы "Салауат Юлаев" 4:1 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

Был айҙағы һуңғы уйындың да һөҙөмтәһе 1:4. Ләкин был юлы иҫәп - ҡунаҡтар файҙаһына.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘБЙӘЛИЛДӘР ТАҒЫ БЕРЕНСЕ!



**Башҡортостанда "Ашҡаҙар таңдары" V республика башҡорт фольклор байрамына йомғаҡ яһалды. Әбйәлил районының Үтәгән ауылынан "Суҡ муйыл" башҡорт фольклор ансамбле (етәкселәре Гөлсәсәк Фәхрисламова һәм Дилә Мусина) Гран-при яуланы. Шулай уҡ төрлө номинацияларҙа еңеүселәр һәм призерҙар билдәләнде.**

Стәрлетамаҡҡа эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Ашҡаҙар таңдары" байрамында булды. Республика етәксеһе ижади коллективтарҙың сығыштарын ҡараны һәм унда ҡатнашыусыларға уңыштар теләне. "Ошо иҫ киткес матур, бөтәһенә лә кәрәкле байрамды мөмкин тиклем күберәк кешеләр күрһен ине. Ысын, тәрән башҡорт халыҡ фольклоры, мәҙәниәте йолаларын дауам итеүсе коллективтарҙың шундай күп булыуы һәйбәт, - тине төбәк Башлығы. - Беҙ Мәҙәниәт министрлығы, республика Хөкүмәте менән берлектә ошо фестивалдәргә, конкурстарға артабан да ярҙам итәсәкбеҙ..."

Башҡортостан Башлығы 2020 йылда республикала Бөтә донъя фольклориадаһы уҙасағын хәтергә төшөрөп, шулай тине: "Бөгөнгө фестиваль - ошондай ҙур ваҡиғаларға әҙерлектең бер сараһы, әлбиттә. Беҙ Фольклориада көндәрендә донъяға башҡорт халыҡ мәҙәниәтен уның бөтә матурлығында, көсөндә, ҡеүәтендә күрһәтә алырбыҙ, тип ышанам".

2006 йылдан уҙғарылып килгән фестиваль башҡорт халыҡ ижадын һаҡлап ҡалыуға, үҫтереүгә һәм пропагандалауға йүнәлтелгән. Унда ауыл клубтары, ҡала мәҙәниәт һарайҙары һәм мәҙәниәт йорттары нигеҙендә ойошторолған үҙешмәкәр һәм халыҡ вокал-хореография коллективтары ҡатнаша. Быйыл байрамда 47 ижади коллектив - республиканың 29 районынан һәм ете ҡалаһынан, шулай уҡ Татарстандан, Ырымбур һәм Һамар өлкәләренән 700-ләп кеше ҡатнашты. Конкурсанттарҙы Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың Милли әҙәбиәт музейы директоры Гөлдәр Моратова рәйеслегендәге жюри баһаланы.

# ӘКИӘТТЕ БАШҠОРТСА ТЫҢЛА



**"Тамыр" телеканалы яңы проект өҫтөндә эшләй. Йәш эстрада, театр йондоҙҙары, блог өлкәһендә танылған шәхестәр башҡорт әкиәттәрен уҡый.**

"Әле беҙ RNT, "Бүреләр" төркөмө лидеры Илшат Абдуллинды, Сабина Кучаеваны әкиәт уҡытып төшөрҙөк. Танылған шәхестәр башҡарыуында "Ҡарт айыу һәм бүре", "Үгәй ҡыҙ Гөлбикә", "Терпе менән ҡуян", "Һаранбай менән Зиннәт", "Бүре ни өсөн айға ҡарап олой" һәм башҡа популяр әкиәттәр яңғыраясаҡ", - тип хәбәр итте телеканал директоры Гөлназ Ҡолһарина.

"Күптән түгел интернетта ҡыҙыма тыңлатыр өсөн башҡорт аудиоәкиәттәрен эҙләп ҡарарға булдым. Тапманым. Бөтә интернетты гиҙеп сыҡтым хатта. Эҙләнеүемде дауам итеп, "Тамыр" студияһына сыҡтым, - тип һөйләй Илшат Абдуллин. - Һөҙөмтәлә, ошо студияла эстрада йондоҙҙары уҡыуында башҡорт халыҡ әкиәттәре тигән яңы балалар проектында ҡатнашырға үҙемә лә тәҡдим иттеләр. Мине әлеге проектҡа йән өрөүсе тип тә атанылар".

Киләсәктә йәш башҡарыусылар Илнур Рамазанов, Ғайсар Миңлеғолов, актер Артур Кәбиров, "Любизар" башҡорт атлы полкында ҡатнашыусы Юлай Ғәлиуллин, фотограф Эдуард Дилмөхәмәтов, видеограф Батыр Ғәлимовты әкиәт уҡытып яҙҙырырға ниәтләйҙәр. Әкиәттәрҙе "Әкиәт китабы" телетапшырыуында, "Иләү" радиотапшырыуында тыңларға мөмкин, ҡайһы бер роликтар интернетҡа һалынған. Проект 12 ноябрҙә старт ала, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында һәр йәкшәмбе эфирға сыға.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**77. Әнисә Таһирова "Йөрәк йәдкәре" китабы.** Йәннәт - әсә аяғы аҫтында, тиелә Ҡөрьәндә. Әнисә Таһирова ижадында әсә образы ҙур урын биләй. Шағирәнең бөтә йыйынтыҡтарында ла уға бағышланған шиғри шәлкемдәр, сонеттар урын ала. Ә бына "Йөрәк йәдкәре" йыйынтығының бөтә дүрт бүлегендә лә күңеле һәм ғәмәлдәре изгелекле әсәй кәүҙәләндерелә. Әнисә Таһированың иң ҡәҙерле кешеһенә арналған иҫ киткес сонеттар шәлкемен, кешелек донъяһын һәр заманда борсоған мәңгелек һорауҙарға шағирәнең яуабын сағылдырған шиғырҙары һәр кемгә ҡыҙыҡлы булыр.

**78. Ҡадир Даяндың балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре.** Балаларҙы бәләкәйҙән китаптар донъяһына ылыҡтырыу, яҡшылыҡҡа өндәгән әҫәрҙәр аша тәрбиәләү маҡсатын алға ҡуйған ата-әсәләр Ҡадир Даян китаптарына иғтибар итергә тейеш. Сөнки яҙыусының балалар өсөн яҙған шиғырҙары, әкиәттәре, хикәйәләре нәҡ дуҫлыҡ, намыҫ, илһөйәрлек, рух , нимә яҡшы һәм нимә яман икәнлеге тураһында бәйән итә. Авторҙың китаптары һуңғы йылдарҙа ҡабаттан баҫылғаны булмаһа ла, китапханаларҙа уның "Тимеркәй", "Һайланма әҫәрҙәр", "Яҡты юл: шиғырҙар, йырҙар, поэмалар, әкиәттәр һәм драма" йыйынтыҡтарын табып уҡырға була. Бөтә быуын балалар ҙа яратып башҡарған "Шайморатов генерал" йыры һүҙҙәрен ижад иткән Ҡадир Даяндың әҫәрҙәрен һәр быуын башҡорто уҡып, белергә тейеш.

"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОШМАНЫҢ МЕНӘН БӘХӘСЛӘШ,

## һуңынан уның дуҫҡа әйләнеүе бар

Йәшлек бер тапҡыр ғына бирелә. Һуңынан иһә, ахмаҡлыҡтарҙы аҡлар өсөн икенсе бер сәбәп эҙләргә тура килә.

**(Бадди Эбсен).**

Әгәр ҙә яҡындарыңдың ни тураһында доға ҡылғанын ишетмәгәнһең икән, "Амин!" тип әйтергә ашыҡма.

**(Веслав Малицкий).**

Ҡатын-ҡыҙ башҡалар кеүек кейенергә теләй, ләкин башҡалар кеүек кейенһә, бик ныҡ ғазаплана.

**(Лешек Кумор).**

Әгәр ҙә ирендең моданы күҙәтеүен шәйләйһең икән...иреңде күҙәтә башла.

**(Константин Мелихан).**

Шулай ҙа донъя алға бара: хәҙер һуғыш менән яфаламайҙар, ә һуғышһыҙ ғына яфалайҙар.

**(Карел Чапек).**

Бәхәсте дошмандарың араһында алып барыу яҡшыраҡ, сөнки һәр төрлө бәхәстән һуң дуҫың - дошманға, дошманың дуҫыңа әйләнеүе бик мөмкин.

**(Биант).**

Икәү ярашҡан урында өсөнсө ахмаҡ булып ҡала.

**(Кароль Ижиковский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше суфыйсылыҡ тураһында кире фекер әйтә. Быны ишетеп ҡалған суфый шәйехе йәш кеше эргәһенә килеп, ҡулындағы ташлы балдағын сисә һәм уға биреп, шулай ти: " Йәш кеше, ошо балдаҡты баҙарға алып бар ҙа, алтын хаҡына ҡуйып һат..." Йәш кеше баҙарға барып, был балдаҡты бер алтын тәнкәгә һатырға маташып ҡарай, ләкин уны берәү ҙә алмай. Хатта йәш кеше һораған хаҡты ишетеп, ҡайһы берәүҙәр асыулана һәм уны ҡыуып ебәрә. Йәш кеше шәйех эргәһенә килеп, "Үтмәҫ тауар бирҙең миңә, уның хаҡы һуҡыр бер тин дә тормай", тип, үҙенең үпкәһен белдерә. "Ә һин алтын менән эшләүсе оҫтаханаға барып, был балдаҡты шундағы оҫтанан баһалатып ҡара әле", - ти шәйех йомшаҡ ҡына. Йәш кеше оҫтахананан бик аптырап килеп инә һәм: " Бына һинең балдағың, хөрмәтле шәйех, ювелир уны ун алтын тәңкәгә баһаланы", ти. "Бына, балаҡай, - ти шәйех, - һин дә суфыйҙар тураһында баҙарҙағылар минең балдаҡ тураһында белгән ҡәҙәре генә беләһең..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2186/10